БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫ ХАКИМИӘТЕ
МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ

БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ИНТЕРАКТИВ ТЕХНОЛОГИЯЛАРҘЫ ҠУЛЛАНЫУ

Өфө ҡалаһы ҡала округы Мостай Кәрим исемендәге
158-се башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте
уҡытыусыһы Игелекова Айгөл Иршат ҡыҙының
эш тәжрибәһенән

Өфө, 2021

УДК 376.1
ББК 74.268.0

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә интерактив технологияларҙы ҡулланыу (Игелекова Айгөл Иршат ҡыҙының – уҡытыусы-мастерҙың эш тәжрибәһенән): Методик-мәғлүмәти йыйынтыҡ. – Өфө: Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы, 2021. – 70 б.

Редакцион коллегия:
Хаффазова Е.Р., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы;
Арыҫланов В.З., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы урынбаҫары;
Шеина О.В., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы директоры.

Сығарылыш өсөн яуаплылар:
Йосопова А.Ғ., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығының баш белгесе;
Рәхмәтуллина С.Х., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһының бүлек мөдире;
Мәүлийәрова Ә.Т., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.
Шәрәфетдинова З.Т., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.

Йыйынтыкта Өфө ҡалаһында 2021 йылда үткәрелгән «Оҫта педагог» һөнәри оҫталыҡ конкурсының еңеүсеһе Игелекова Айгөл Иршат ҡыҙының – уҡытыусы-мастерҙың эш тәжрибәһе тупланды. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә интерактив технологияларҙы эш тәжрибәһендә ҡулланырға өйрәтеүсе дәрес өлгөләре индерелде.

Методик-мәғлүмәти йыйынтыҡ уҡытыусыларға башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә заманса белем биреү технологияларын укытыу процесында ҡулланғанда ҙур ярҙам булып торасаҡ. Йыйынтыҡ баш ҡалабыҙҙың туған тел, региональ предмет уҡытыусылары, юғары уҡыу йорттары һәм педагогия колледждары студенттарына, туған тел уҡытыу мәсьәләре менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

© Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы, 2021
© Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы, 2021

Йөкмәткеһе

Музей – тарихты һаҡлаусы усаҡ. Оҫталыҡ класы 4

Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музей матералдарын тел өйрәнгәндә, әҙәбиәт дәрестәрендә ҡулланыу. 6

Мәрйәм Бураҡаева исемендәге Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кабинет-музейы. 16

Театр сәнғәте һәм драматургия кабинет-музейы. 30

Хәрби дан кабинет-музейы. 37

Класс сәғәте. Мин кешеләр араһында, кешеләр минең менән. 45

«Танграм!» башватҡысын башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә ҡулланыу. 50

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына дәрестәрҙә ҡулланыу өсөн интернет ресурстар. 56

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә QR штрих-код – кодлаштырылған мәғлүмәтте ҡулланыу. 62

Музей – тарихты һаҡлаусы усаҡ
Оҫталыҡ класы

Маҡсат:

– мәктәп музейҙарының белем биреүҙәге ролен күрһәтеү, тыуған яҡтың, мәктәптең тарихын өйрәнеү кәрәклеген еткереү;

– уҡыусыларҙа туған телгә мөхәббәт уятыу, халҡыбыҙҙың үткәнен хөрмәт итергә өйрәтеү, хәҙерге ҡаҙаныштарына ихтирам һәм ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү, милли аң тәрбиәләүҙә мәктәп музейҙарының әһәмиәтен күрһәтеү.

1. Әҙерлек.

Инеш өлөш.

Музей – тарихты һаҡлаусы усаҡ.

– Хөрмәтле коллегалар! Мин – Игелекова Айгөл Иршат ҡыҙы. Өфө ҡалаһы М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. «Уҡытыусы-мастер» бәйгеһендә көс һынап ҡарарға булдым. Быға тупланған тәжрибәм сәбәпсе булды. Йөрөгән таш шымара, ятҡаны мүкләнә, ти бит халҡыбыҙ. Тәжрибәмде башҡа коллегаларым менән бүлешмәксе булдым. Үҙем Баймаҡ районы Ҡаратал ауылында тыуғанмын, 1991 йылда Сибай педагогия училищеһының башланғыс кластар, 1996 йылда Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика бүлеген тамамланым. 2015 йылда баш ҡалала «Йыл уҡытыусыһы» бәйгеһендә еңеүсе, республика бәйгеһендә финалист булдым. Күп йылдар директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләнем.

Бөгөн уҡытыусы алдында ғәйәт ҙур бурыстар тора. Һәләтле, заман талаптарынан сығып эш итә торған, рухи, физик яҡтан камил шәхес тәрбиәләү – иң төп маҡсатыбыҙ. Ә ул үҙ сиратында, туған телен яратыусы, үҙ милләтенең мәҙәниәтен, күркәм йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын хөрмәт итеүсе булырға тейеш. Телһөйәрлек, илһөйәрлек кеүек сифаттар үҙеңдең тыуған яғыңды, уның тарихын, шәхестәрен яҡшы белгәндә генә формалаша ала. Тәрбиә эшендә Ватан темаһы һәр саҡ актуаль.

Патриотик тәрбиә биреүҙең бер алымы – тыуған яҡ тарихын өйрәтеү. Был уҡыусыларға үҙ төбәктәрендә йәшәгән кешеләр тураһында күберәк белергә, яҡындан танышырға мөмкинлек бирә. Уларҙың тормошо, йәшәйеше балаларҙа һоҡланыу һәм ғорурланыу тойғоһо уята, өлкән быуын кешеләренә ҡарата хөрмәт тәрбиәләй. Патриотик тәрбиә биреүҙә мөһим саралаҙың береһе – музейҙарҙағы тарихи экспонаттарҙы, халҡыбыҙҙың рухи һәм матди культураһын, бөгөнгөһөн, үткәнен сағылдырыусы ҡиммәтле материалдарҙы ҡулланыу.

Бөгөнгө тема – «Гимназиябыҙҙың кабинет-музейҙарын тел, әҙәбиәт дәрестәрендә ҡулланыу».

Музей халыҡтың тарихи байлығын һаҡлауға, уның ижади емештәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Улар кешеләргә үҙ ырыуын, илен, тарихын белергә, үткәндәре хаҡында бай мәғлүмәт алырға ярҙамлаша. Музей – үткән

менән бөгөнгөнө бәйләгән, киләсәккә юл һалған, тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлаған изге урын, рухи аҙыҡ биргән мәҙәни усаҡ ул. Унда тупланған экспонаттар, материалдар үткәндәрҙең иҫтәлеген һаҡлай. Музейҙың тәғәйенләнеше лә тап тарихты һәм халыҡтың йөҙөн, йәшәйешен сағылдырған ҡомартҡыларҙы йыйыу, һаҡлау һәм мираҫ итеп киләһе быуындарға тапшырыуҙан тора ла инде. Шул йәһәттән мәктәп музейҙары ла бик файҙалы, әһәмиәтле. Йәш быуынға белем биргәндә уларҙың роле баһалап бөткөһөҙ. Шуға күрә гимназиябыҙҙың кабинеттарында музейҙар асыу тәҡдимен хупланыҡ. Хәҙерге көндә белем усағында 4 музей-кабинет булдырылған. Бер кабинет заманса эшләнде. Ул «Башҡорт телен өйрәнеү һәм һаҡлау электрон ресурс үҙәге» тип атала. Әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музей, Мәрйәм Бураҡаева исемендәге Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кабинет-музейы, Хәрби дан кабинет-музейы, Театр сәнғәте һәм драматургия кабинет-музейы бар.

Бөтә кабинет-музейҙарыбыҙ тураһында мәғлүмәтте БР-ҙың Мәғариф һәм фән министрлығы сайтында табырға була. Ошо һылтанма аша ҡарарға мөмкин:

1. Кабинет-музей Мустая Карима:
https://education.bashkortostan.ru/presscenter/photo/1919/

2. Кабинет-музей истории и культуры Башкортостана имени
М.С. Буракаевой:
https://education.bashkortostan.ru/presscenter/photo/1920/

3. Кабинет-музей драматургии и театрального искусства:
https://education.bashkortostan.ru/presscenter/photo/1921/

Уҡыу материалын тәрәнәйтеп өйрәнеүгә булышлыҡ иткән Мостай Кәрим исемендәге башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинет-музейының белем биреүҙәге роле

Оҫталыҡ класы

Маҡсат: Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында булдырылған башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты менән таныштырыу. Заманса йыһазландырылған кабинеттың уҡыу материалын тәрәнәйтеп өйрәнеүҙәге ролен күрһәтеү.

I. Инеш өлөш. «Әҙәбиәт-күңел көҙгөһө».

Әҙәби әҫәрҙәр тормошобоҙға йәм бирә. Әҙәби китаптар уҡыһаң, зиһенең байый, тормошта йәшәргә өйрәнәһең. Ошо китаптар ярҙамында тормошҡа тәжрибә туплана. Әҫәрҙәрҙе уҡыған ваҡытта ныҡыраҡ хәтерҙә ҡалһын өсөн ярҙамға музей мәғлүмәттәре, экспонаттары килә. Әҫәрҙең ҡабул ителеүе лә башҡасараҡ була.

Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музейы яҙыусының тормош юлын, әҫәрҙәрен үткәндә бик отошло. Ундағы стенд мәғлүмәттәре, китаптар, яҙыусының шәхси әйберҙәре, фоторәсемдәр дәрестә бик файҙалы. Кабинетта әҙиптең китаптары, башҡа яҙыусыларҙың автографлы китаптары күп. Әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн дә, балаларға ла музей – күңел тирбәтер, илһам килтерер урын.

II.Төп өлөш.

1. Мәктәп музейы нисек барлыҡҡа килде һәм тулылана? Ҡыҫҡаса экскурсия. Презентация ҡулланыу.
2. Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музейында үткәрелгән практик эш.

Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музей – гимназиям ғорурлығы.

Уҡыусылар белем алған гимназия Мостай Кәрим иҫтәлегенә 2006 йылда асыла. Бөйөк шағирыбыҙ вафат булғас, уның иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһындағы Указға Башҡортостандың президенты Мортаза Рәхимов ҡул ҡуя. 2007-2008 уҡыу йылында Өфө ҡалаһы Хакимиәте, Киров районы Хакимиәте, гимназия коллективы, Әлфиә һәм Илгиз Кәримовтар ярҙамы менән мәктәбебеҙҙең бер кабинетында музей ойошторола. Әҙиптең шәхси әйберҙәре, китаптары, фотолары тупланып, кабинет-музей 2007 йылдың 19 октябрендә үҙ ишектәрен аса.

Беренсе стендта Мостафа Сафичтың тормош юлы, ижадының мөһим даталары күрһәтелгән. Шәжәрәһе тулы, бай Мостай олатайҙың. Нәҫел-нәсебеңде белеү – үҙе бер ғорурлыҡтыр, тип иҫәпләйем. Ағастың да тамырҙары тәрән булған һайын, үҙе мәғрур, юғары була бит.

Кабинетҡа килеп инеү менән ниндәйҙер йылылыҡ бөркөлә. Кабинет йылдан-йыл тулылана. 2019 йылда Республика Башлығының Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән Грантын яулап, 3D экран ҡуйҙыҡ. Тап ошо форматлы экранға тура килерлек, шағирҙың тормошон, ижадын яҡтыртыусы фильм да төшөрҙөк. Фильмда үҙебеҙҙең гимназия уҡыусылары ҡатнаша. Риторик һорауҙар бирелгән өлөшө һәр кемде уйландыра. Музейҙағы стендтар бик йөкмәткеле. Мостай Кәримдең шәжәрәһенән башланып, бала сағы, үҫмер йылдары, һуғышта ҡатнашыуы, әҫәрҙәре сағылыш таба һәм башҡа иҫтәлектәр тупланған. Был музейҙа үткән дәрестәр, билдәле шәхестәр менән осрашыуҙар, башҡа саралар уҡыусылар күңелендә мәңгегә уйыла. Шуға ла улар Мостай рухына тоғролар, уның тормошо күптәргә маяҡ.

Киләһе стенд «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» тип атала. Һәр кемдең күңелендә бала сағы онотолмаҫ бер мәл булып уйылып ҡала. Мостай Кәримдең бала сағы тураһында уның билдәле әҫәре «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» тип исемләнә. Әҙиптең: «*Бәхетле булһа ла, бәхетһеҙ булһа ла беҙҙең бала сағыбыҙ оҙон-оҙаҡ йылдар буйынса артыбыҙҙан эйәреп килә. Дөрөҫөрәге, беҙҙең күңелебеҙҙән китмәй»,* – тип яҙған юлдары бар. Стендтағы фотоларҙан бәләкәй Мостафаны күҙ алдына килтереп була.

Мостай Кәрим үҙе лә балаларҙы ярата. Ейәненә уҡ-һаҙаҡты үҙ ҡулдары менән яһап бирә. Был экспонат әле музейыбыҙҙа һаҡлана.

«Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» тигән исемле стендта фронтовик Мостай Кәримдең һуғыш йылдарындағы тормошо һәм ижады яҡтыртыла. Һуғыш башланыу менән әрме сафына алынған Мостафа Сафа улы, яу яланын үтеп, Еңеүҙе яҡынайта. Ул, ҡыҫҡа сроклы хәрби курстарҙа уҡығас, элемтә бүлеге һәм артиллерия дивизионы штабы начальнигы булып хеҙмәт итә. Фронтта яралана. Һауығып сыҡҡас, хәрби журналист булып фронт газеталарында эшләй. Украина, Румыния, Болгария, Венгрияны азат итеүҙә ҡатнаша. Еңеү көнөн Вена ҡалаһында ҡаршылай. Ошо экспозицияла әҙиптең комсомол билетының күсермәһе лә бар. Рурҙа ҡойолған дошман пуляһы комсомол билетын үтә сығып, йөрәк пәрҙәһе тапҡырында туҡтай. «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа» шиғыры бигерәк тә минең күңелемдең нескә ҡылдарын сиртә, ә етмеш йыл элек яҙылған «Украина» шиғыры әлеге ваҡытта булған һуғыштың афәтен иҫкәртә һымаҡ. «Билдәһеҙ һалдат» шиғыры һуғышта ҡорбан булған һалдаттар иҫтәлегенә яҙылған.

«Ҙур хеҙмәткә – ҙур хөрмәт» тип аталған стенд шағирыбыҙға хөкүмәт тарафынан тапшырылған наградаларына арнала.

Мостай Кәрим – дуҫлыҡ йырсыһы. «Дуҫлыҡ күперҙәре» тип аталған стендта төрлө ил халыҡтары менән аралашып йәшәүен иҫбатлаусы фотографиялар урынлаштырылған. Үҙ илен яраткан, халкын данлаған Мостай Кәримде күп илдәрҙә хөрмәт итәләр.

Олуғ остазға әйләнгән аҡһаҡалыбыҙҙың ижады күптәрҙе әсир итә. Төрлө жанрҙарҙа ижад итеүсе Мостай Кәрим башҡорт әҙәбиәтенә ифрат ҙур өлөш индергән. Драматург, шағир, яҙыусы Мостафа Сафич менән сикһеҙ ғорурланабыҙ! Һәр кем уның әҫәрҙәрен уҡып, әле лә үҙен борсоған һорауҙарға яуап таба. Бөтә донъяға билдәле һәм туған халҡындың ғорурлығы булыу - оло бәхет. Шул уҡ ваҡытта был яуаплы бурыстыр ҙа, миненсә. «Олуғ остаз» стендына ҡарап, ошоларҙы күҙ алдынан үткәрергә мөмкин.

«Кешеләрҙең күҙҙәренә ҡарап...» стенды эргәһендә уйланып торам. Әҙип күпме китап уҡыусылар менән осрашҡан! Алсаҡлығы, ихласлығы йөҙөнә сыҡҡан. Бер ҙә унда маһайыу юҡ. Фотоһүрәттәргә ҡарап та кешенең ниндәй икәнен әйтеп була.

«Милләтебеҙҙең рухи йондоҙо» исемле стенд та миңә бик әһәмиәтле. Башҡортостанын шағир нисек ярата! Ватанына тоғро аҫыл ир-уҙаманы һөйөүен шиғырҙарында ихлас яҡтырта. Шул илһөйәрлек тойғоһо ғүмер буйына дауам итә. Мостай Кәрим тыуған ерен һаҡлап, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Батырлыҡ, фиҙакәрлек, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ – быларҙың бөтәһе лә Мостай Кәримгә хас. Портретына ҡарап та ошоларҙы тойомлап була.

«Күкрәгемдән ҡоштар осорам» стенды Мостафа Сафичты күп яҡлы талант эйәһе икәнен иҫбатлай. Шиғыр һәм поэмаларының, хикәйә һәм повестарының, сәхнә әҫәрҙәренең исемдәре был стендта яҙып ҡуйылған.

«Беҙҙең өйҙөң йәме» стенды иһә гимназияла сығып килгән ошо исемле газета һандары менән тулыландырыла, һәр ваҡыт алмаштырылып тора. Уҡыусылар газетала ижади эштәрен баҫтыралар, гимназия тормошон яҡтырталар.

Кабинет-музейҙа Мостай Кәримдең баҫыу машинкаһы, уҡыусылар тарафынан сигеп эшләнгән портреты, яҙыу-һыҙыу әйберҙәре, «Айгөл иле» драмаһы буйынса 1968 йылғы брошюра – ҡәҙерле экспонаттар.

Артабан музейҙы тулыландырыуҙа коллектив хеҙмәткәрҙәре, ата-әсәләр, уҡыусылар күп көс һала. Тыуған яғына сәйәхәт ҡылып, яҡташтары менән осрашып, иҫтәлектәр туплайҙар, экспонаттар алып ҡайталар. Әҙиптең төрлө телдәрҙә баҫылған китаптары, иҫтәлектәре, автографлы дуҫтары бүләк иткән китаптары (улар араһында Сыңғыҙ Айытматов, Ҡайсын Кулиевтар, Фадеевтар бар), гәзит-журнал мәҡәләләре тупланған папкалар һаҡланған музей – уҡыусыларҙың яратҡан урыны. Кабинет-музей әҙиптең ижады, тормошо менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн баһалап бөткөһөҙ ҙур бүләк. Ҡыҙы Әлфиә Мостаевна атаһының китаптарын әленән-әле музейға биреп тора, ҡасандыр атаһына дуҫтары тарафынан бүләк ителгән автографлы китаптарын да кабинет-музейға тапшыра.

Гимназияға йыш ҡына сит ил ҡунаҡтары, яҙыусылар, шағирҙар, Мостай Кәримдең туғандары һәм ҡәләмдәш дуҫтары килә. Иң беренсе сиратта гимназия менән таныштырыу экскурсияһын кабинет-музейҙан башлайбыҙ.

Хәҙер Мостай Кәрим Фондының грантын иң шәп гимназистарға тапшырыу йолаға инде. Ошо кабинетта был грантты утыҙҙан ашыу уҡыусы алып шатланды. Башҡорт теле буйынса олимпиадаларҙа, бәйгеләрҙә призлы урындар алыусы уҡыусылар, уҡыуҙа егәрлеләр был аҡсалата премияға лайыҡ булалар.

Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музей – гимназиябыҙ ғорурлығы. Киләсәктә лә Мостай рухы күңелдәрҙән китмәҫ, һүнмәҫ маяҡ булып тормош юлыбыҙҙы яҡтыртып торор.

Мостай Кәрим тураһында үҙебеҙ төшөргән фильмды ҡарарға тәҡдим итәм.

4 урында риторик һорау яңғыраясаҡ, бергәләп ошо һорауҙарға яуап биреп ҡарарбыҙ.

1. Һеҙҙең бала сағығыҙҙағы иң яҡты хәтирәләрегеҙҙең береһен һөйләп китә алмаҫһығыҙмы?

2. Нимә ул бәхет? Һеҙҙеңсә ул ниндәй төҫтә?

3. Илдә тыныслыҡ булһын өсөн нимә эшләй алабыҙ?

4. Ватанға һөйөүҙе нисек аңлайһың?

III. Практик өлөш.

Маҡсат: Болот технологияһы мөмкинлектәрен файҙаланып, уҡыусыларға Мостай Кәримдең ижады буйынса проект эшен эшләүҙең бер-нисә юлын күрһәтеү.

Болот технологияһының мөмкинлектәрен беҙ, уҡытыусылар, әле күҙ алдына ла килтереп бөтмәйбеҙ. Бөгөн отошло тип тапҡан проекттар ысулын күрһәтергә уйлайым. Уҡыусылар менән бергәләп башҡарған проекттарыбыҙ байтаҡ: «Ижади оҫтахана», «Сәсәндәр мәктәбе», «Салауат нисә йәшендә?», «Өфө минең башҡалам», «Минең Ватаным» һәм башҡалар.

«Мостай иленә» сәйәхәткә юлланайыҡ.

Мостай Кәримдең теле ябай ҙа, бөйөк тә. Афоризмдар булып халыҡ теленә күскән шиғыр юлдары, айырым фекерҙәре шуны иҫбатлай. Өс кимәлдә эш төрө тәҡдим ителә.

1. Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тап:

– Һин һөйләнең ...(бәхетемдең)

Аҡлығы тураһында. (М. Кәрим «Уҡытыусыма»).

– Ҡараҡҡа ...(ҡул) бирмәҫкә, ...(һүҙ) ҡушмаҫҡа! («Өс таған»).

– Мин һуғышты әйтмәйем. Унда берәү ҙә ...(мәрәкә) күрәйем тип бармаған. («Өс таған»).

– Ай нурына манып, йырҙар теҙҙем,

Халҡым өсөн, тинем, яҙғаным.

Нур өләшеп, ҡараңғыла ҡалдым,

Мин бисара –....(Шәйехзадамын). (М.Кәрим «Бабич өнө»).

Бына ошолай итеп, М.Кәримдең программаға ингән әҫәрҙәрен иҫкә төшөрәбеҙ.

2. Башланған фекерҙе дөрөҫ итеп тамамлап ҡуй:

Егеттәр әйткән һүҙ – (ҡырҡылып ауған имән). («Үлмәҫбай»).

Арба минеке – (йыр һеҙҙеке). («Оҙон- оҙаҡ бала саҡ»).

Залимды золом тыуҙыра, (золомдо залим ҡыла). («Ташлама утты, Прометей!»).

Дәрәжәһе ҙур булған һайын, (бәндәләрҙең ҡаны ҡаты була). («Ай тотолған төндә»).

Арыҡ аттың (күгәне киң). («Оҙон-оҙаҡ бала саҡ»).

3. Иҫеңә төшөр, деталдәрҙе ҡарап, ошо әҫәрҙең иң билдәле юлдарын әйт:

– мәсет манараһы һүрәте (Мәсет – ул хоҙай йорто).

– имән һүрәте (Был имән минең Оло инәйем булып сыға. Уның тирәһендә инде балалар ғына түгел, беҙҙең бөтә ғаиләбеҙ – атайым, Кесе инәйем, ағайҙарым, апайҙарым әйләнә. Хатта бер пар күк атыбыҙ, ике ала һыйырыбыҙ, быҙауҙарыбыҙ, һарыҡтарыбыҙ, тауыҡ-ҡаҙҙарыбыҙ әйләнә. Шул кеше тирәһендә беҙҙең барлыҡ бәхет-шатлыҡтарыбыҙ, ҡайғы-хәсрәттәребеҙ, көндәлек мәшәҡәттәребеҙ, өмөт-хыялдарыбыҙ әйләнә – донъябыҙ әйләнә. Минең Оло инәйем ошо әйләнеп торған донъяның үҙәге ул. Шуға күрә тыныс һәм хәүефһеҙ баҫып тора. Уның өсөн, әйтерһең, һәләкәт тә, ғазап та юҡ. Йөҙөндә шәфҡәтле йылмайыу... Имән япраҡтарында иртәнге нурҙар һикерешеп уйнай. Әллә нурҙар, әллә япраҡтар үҙҙәре талғын ғына ҡыштырҙай. Ерҙә һуғыш та, үлем дә юҡ.)

– арҡан (Арҡан. Бау ишкәндә ваҡыт тиҙ үтә ул. Осо ла, сиге лә юҡ уның – иш тә иш кенә. – Ҡара Йомағол йомоҡ кешеләрҙән һанала, уның ауыҙынан һүҙҙе көрәк менән ҡайырып алырға кәрәк, тиҙәр. Бөгөн теле-телгә йоҡмай. Бер аҙ шымып тора ла дауам итә. – Бау ул, ҡустым, донъяның тотҡаһы. Бау булмаһа, бөтә донъя таралып төшөр ине.)

4. Шәхестең, әҙиптең бөйөклөгө, әҙәбиәткә индергән өлөшө уның ижадында, күтәрелгән проблемаларҙың, ҡуйылған һорауҙарҙың киңлеге,

тәрәнлеге мәңгелек фәлсәфәгә ҡағылышлы булыуы менән билдәләнә. Беҙ ҙә шул юҫыҡта ижади фекерләп алайыҡ. Ҡуйылған һорауҙарға 4 юллыҡ шиғри яуап яҙығыҙ.

– Кем ыҙмаһы иң бейек?

– Бына шуға өмөт итәмен...

– Ирекле шиғыр яҙырға.

5.Пазлдар менән эш

– Ә хәҙер Өфөлә Мостай эҙҙәре буйлап йөрөп ҡайтайыҡ. «Мостай иленә сәйәхәт» исемле экскурсия маршруты төҙөйөк.

Экранда Өфөнөң төрлө мөйөштәре күрһәтелгән һүрәттәр бирелгән, шиғыр юлдары яҙылған. М. Кәримдең тормошон һәм ижадын хронологик тәртиптә бирелгән һүрәттәр ярҙамында асып бирергә кәрәк. Һүрәттәрҙе (кадрҙарҙы) шылдырып, экскурсия маршрутын баш ҡалаға килгән ҡунаҡтарға ҡыҙыҡлы һүрәтләмә итеп һалайыҡ.

– М. Кәрим һәйкәле;

– М. Кәрим ҡәбере;

– М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры;

– М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры;

– Энгельс урамындағы таҡтаташ;

– Яҙыусылар союзы бинаһы;

– Рауза менән осрашҡан;

– редакциялағы эше;

– БДУ-лағы таҡтаташ.

IV. Рефлексия:

Минең өсөн ... бик файҙалы булды.

Үҙем нимә тәҡдим итер инем…

V. Өй эше. Мостай Кәримдең бер әҫәренә презентация йәки буктрейлер яһарға.

VI. Йомғаҡлау.

Кабинет- музейҙар гимназиябыҙға йәм бирә, йән өрә. Бындағы мөхит һәр кемде әҙәбиәт донъяһына, халҡыбыҙ үткәненә, хәҙергеһенә алып инә, тарих һаҡларға булышлыҡ итә. Барлыҡ уҡыусылар, ата-әсәләр, уҡытыусылар тырышлығы менән улар байытыла. Киләсәк замандарҙа ла бында уҡыясаҡ балаларға кабинет файҙалы булыр, белем алыуҙарына этәргес көс булыр.

SHOT ON REDMI 7

Мәрйәм Бураҡаева исемендәге Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кабинет-музейы
Оҫталык дәресе

Маҡсат: М. С. Бураҡаева исемендәге Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кабинет-музейы тураһында мәғлүмәт биреү, алып барылған эше менән таныштырыу, башҡорт халҡының үткәненә байҡау яһау.

1. Инеш һүҙ.

Беҙҙең гимназияла М.Бураҡаева исемендәге Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кабинет-музейы ла ойошторолдо. Бында башҡорт халҡының үткәненә байҡау яһап була. Ни өсөн Мәрйәм Бураҡаева исемендәге музей тип атаныҡ тип ҡыҙыҡһыныр ҡайһы берәүҙәр. Сөнки беҙ уҡыған «Тормош һабаҡтары» дәреслегенең авторы Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы быға лайыҡлы шәхес: ил инәһе, биш балаға төплө белем һәм тәрбиә биргән әсәй, улар бөтәһе лә республиканың билдәле шәхестәре, көслө рухлы ҡатын, әле лә республикала әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, балаларҙы көслө рухлы итеп тәрбиәләүҙә үҙ көсөн йәлләмәй.

Кабинеттың девизы – Мәрйәм Бураҡаеваның «Арғымаҡ» китабындағы кеүек яңғырашлы. **Аҡыллы, Рухлы, Ғәмле, Ырыҫлы, Моңло, Аңлы, Ҡотло** булығыҙ!

Кабинет-музейҙа башҡорт өйөнөң фрагменты бирелә.

Унда халҡыбыҙҙың боронғо тормошон күҙалларға була. Көнкүреш әйберҙәр, эш ҡоралдары, милли кейемдәре, йорт кәрәк-яраҡтары, һауыт-һаба һәм башҡа экспонаттар менән йыһазландырылған был мөйөш. Улар араһында иң боронғо эш ҡоралдары, музыкаль инструменттар, һауыттар бар.Таш тирмән, көбө, боронғо быҫҡы, йышҡы, умартасы өсөн кәрәк-яраҡтар балалар өсөн ҡыҙыҡлы. Дәрес ваҡытында ошо экспонаттарҙы ҡулланабыҙ, дәрестән һуң түңәрәктәрҙә уларҙың тарихын өйрәнәбеҙ, эҙләнеү эштәре лә башҡарабыҙ. Кабинетта фольклор түңәрәге алып барыла.

Төрлө тарафтарҙан ҡунаҡтар килеп тора беҙгә.

Кабинеттың стендтарына, экспонаттарға кюар-кодтар беркетелгән. Музейға килгән һәр кеше ошо кодтарҙы телефоны ярҙамында асып, мәғлүмәт таба ала. Дәрестә билдәле рәссамдарҙың картиналарын үткән саҡта, мәҫәлән, бала ошо рәссам хаҡында, был картинаның яҙылыу тарихы тураһында мәғлүмәтте үҙ аллы стендтарҙағы кюар-кодтарҙан уҡып белә ала.

2. Мәрйәм Бураҡаева исемендәге Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кабинет-музейы менән таныштырыу

Гимназиябыҙ 2006 йылда барлыҡҡа килә. Ошо уҡ йылда Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы кабинетында музей асыла. Ул «Тормош һабаҡтары» китабы авторы, йәмәғәт эшмәкәре Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаеваның исемен йөрөтә. Бындағы экспонаттарҙы ата-әсәләр, уҡыусылар, уҡытыусылар йыйған. Ә күп өлөшөн Мәрйәм апай Бураҡаева үҙе алып килгән. Уның ҡулы менән эшләнгән түшәктәр, юрғандар, сигелгән таҫтамалдар, ҡорама, юрғандар, ырғаҡ менән бәйләнгән ултырғыс япмалары, суҡлы шәл – музей күрке.

Үҙемдең шәжәрәмде балалар менән хеҙмәт дәресендә эшләнек.

Музейҙа бик боронғо ҡомартҡы әйберҙәр ҙә бар. Мәҫәлән, 1934 йылғы мандолинаны уҡыусыбыҙ Зөлкәрнәев Ислам Учалы районынан алып килеп бүләк итте. Был музыка ҡоралы өләсәһенең өйөндә, ҡыйыҡ башында һаҡланған. Бабич мандолинала уйнарға әүәҫ булыуын беләбеҙ. Был инструментты Бабичтың биографияһын үткәндә ҡулланам.

Ошо райондан алып килгән йәшмә таштарҙың төрлөлөгө һоҡландыра. Төҫтәре иҫ киткес матур! Ҡунаҡтар килгән саҡта Учалы районындағы Әүеш күле, Рамаҙан әүлиә тураһында ла мәғлүмәт алып китәләр. Бер ай ғына сығып аҡҡан шишмә тураһында һөйләйбеҙ. Ғөмүмән алғанда, был кабинеттың экспонаттары Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәресендә файҙалы итеп ҡулланабыҙ.

Музейҙа ҡул сепараторы бар. Уға 100 йыл тирәһе. Математика уҡытыусыһы Флүрә Хабрахмановнаның әсәһен кейәүгә биргәндә туйына бүләк иткәндәр. Олоғайғас, ҡыҙына тапшыра ул был бүләкте. Хужабикә был донъянан китһә лә, ҡомартҡыһы әле бар, эшләй, боҙолмаған. Һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» повесында сепаратор аша ҡаймаҡ айыртыу тураһында уҡыйбыҙ. Хәҙерге балалар сепараторҙың ни өсөн ҡулланылғанын да белмәй үҫә, шуға был экспонат тураһында дәрестә мәғлүмәт алыуҙары яҡшы.

Ҡымыҙ бешеү, әҙер ҡымыҙҙы һалып ҡуйыр һауыттар – быларҙы ла музейҙа табырға мөмкин. Хәҙер был һауыттар кешелә һирәк осрай. Әҙәби әҫәрҙәр үткәндә был экспонат та балаларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәрен үткәндә был һауыт-һаба исемдәре атамалары осрай.

Умартасы кейемдәрен Михайловка техникумында директор булған атай – Әминев Илшат алып килде. Умарта эсендә кәрәҙле бал, умартасыға кәрәкле эш ҡорадары ҡунаҡтарҙа һоҡланыу тыуҙыра. Элек-электән халҡыбыҙ умартасылыҡ менән шөғөлләнгән, ҡул эштәренә маһир булған. балаҫ һуҡҡан, сабата ишкән, йүкәнән һалабаш эшләгән, йөн иләп, бейәләй, ойоҡбаштар бәйләгән, ҡорама ҡораған, кейеҙ баҫҡан... Ошо һанап киткән эштәр өсөн ҡорамалдар ҙа был музейҙа урын алған. Йыш ҡына Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина, Ноғман Мусин әҫәрҙәрендә был ҡорамалдар исемдәре осрай. Балалар араһында кәрәҙле бал нимә икәнен белмәүселәр ҙә осрап ҡуя.

Музей экспонаттарҙың һәр береһенә кюар-кодлап исеме яҙылған, ике –өс телдә мәғлүмәт табып була. Экскурсияға килгән һәр кеше үҙе ошо кюар-кодтар ярҙамында мәғлүмәт ала.

Кюар-кодтарҙың һылтанмаларын балалар менән бергәләп йыябыҙ. Бәйләнештә селтәрен ҡулланам. Шул һылтанмаларҙы Самрау медиа нәшриәтенә ебәрәм, дизайнлап эшләп бирәләр.

III. М Бураҡаева кабинет-музейында «Талҡан байрамы»

– Хәҙер һеҙҙе халҡыбыҙҙың милли ашы булған талҡандың байрамына саҡырам. Алдан уҡыусылар өсөн бирсәткәләр, алъяпҡыстар алына. Талҡан оно, тирмән, һауыт-һаба кәрәк буласаҡ. Был байрамды Төмән өлкәһенән килгән бер класс һәм уларҙың уҡытыусылары өсөн үткәрҙем. Уның тарихы былайыраҡ. Төмәндә уҡыусы 4-се класс уҡыусыһы республикабыҙ Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировҡа хат яҙған. Эстәлегендә әсәһенең Башҡортостанда тыуыуы, әлеге көндә Төмәндә йәшәүе, туғандары вафат булғас, Башҡортостанға ҡайтыу мөмкинлеге булмауы тураһында яҙыла. Улы бик матур төбәк булған Башҡортостан менән танышҡыһы килеүен дә йәшермәй, ярҙам һорай. Унда йәшәүсе башҡорт халҡының тормошо, тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре ҡыҙыҡһындыра малайҙы. Рәдий Фәрит улы ошо малайҙы бөтә класы һәм класс етәксеһе менән бергә Башҡортостанға саҡыра. Экскурсиялар ойоштороу Киров районына йөкмәтелә. Шунан башҡорт гимназияһына үтенес менән мөрәжәғәт итәләр. Беҙ ҡунаҡтарҙы ҡабул иттек һәм халҡыбыҙҙың тормошо, тарихы, мәҙәниәте менән таныштырҙыҡ. М.Бураҡаева исемендәге кабинет-музейҙа мин балаларҙы талҡан тартыу серенә төшөндөрҙөм. Тамаша залында уҡыусылар концерт ҡуйҙы, ҡурай, ҡумыҙ, думбыра кеүек музыка ҡоралдарында уйнанылар. Ҡумыҙға өйрәтер өсөн оҫталыҡ дәресе ойошторҙоҡ. Уҡтан атыу буйынса бәйге ойошторҙоҡ, кейеҙ баҫыу серҙәренә төшөндөрҙөк. Шул матур байрамдың бер өлөшө булған талҡан милли ашыбыҙ байрамын һеҙгә тәҡдим итәм. Ҡала балаларының күбеһе талҡандың нимә икәнен дә белмәй. Халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, көн-күрешен, тарихын өйрәтеү аша балаларға телгә һөйөү, халҡыбыҙ менән ғорурлыҡ хисе тәрбиәләп була.

Талҡан байрамы

Маҡсат: ата-бабаларҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеү, ҡурмас, талҡандың ни тиклем файҙалы булыуын, милли ризыҡтарыбыҙға ҡыҙыҡһыныу уятыу, балаларҙы талҡан эшләргә өйрәтеү.

Был сара башҡорт халҡының көнкүрешен сағылдырған кабинет-музейҙа үткәрелә. Сара ураҡ өҫтөн күһәткән бейеү менән асыла. Бер ҡыҙ «Ураҡсы ҡыҙ» йырын башҡара, ә икенсеһе талғын ғына бейей.

Уҡытыусы:

Шөкөр тимен, динебеҙ ҙә ҡайтты,
Онотолған талҡан – өҫтәлдә.
Рух ныҡлығы, быуындар бәйләнеше
Кәрәк бигерәк тә йәштәргә.
Бик шәп бит ул талҡан, ҡурмас
Тәнебеҙгә сихәт бирерлек.
«Химиялы»аҙыҡтарҙы онотоп,
Өҫтәлдәрҙе көн дә биҙәрлек.
(Фәйрүзә Таймасова).

Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Бөгөн беҙҙә байрам- талҡан байрамы.

Борон ураҡтар урылып, көлтәләр бәйләнгәс, ашлыҡтар урылып бураларға һалынған. Ошо ваҡытта халыҡ бер-береһенән арттырып, «Кемдеке тәмлерәк булыр» тип, ярышып ҡурмас ҡурғандар, талҡан эшләгәндәр.

Эйе, талҡандың файҙаһы һанап бөткөһөҙ. Ул организмды туҡлыҡлы матдәләр менән тәьмин итә, матдәләр алмашыныуын яйға һала, ҡанды, күҙәнәктәрҙе ағыулы матдәләрҙән, токсиндарҙан, шлактан, рак күҙәнәктәренән, холестериндан арындыра. Тағы ла ундағы А, С, Е витаминдары организмды йәшәртә, күҙҙең күреү һәләтен арттыра, иммунитетты нығыта, кешегә көс һәм ҡеүәт бирә.

«Талҡан гүзәл заттарҙы йәшәртә», – ти беҙҙең билдәле яҙыусыбыҙ Мәрйәм апай Бураҡаева.

Бөгөн мин һеҙгә талҡан эшләргә өйрәтәм. Тәүҙә бойҙайҙы йыуырға кәрәк, һуңынан ҡаҙанға һалып, ҡураһың. Бына шул ҡурылған бойҙай ҡурмас тип атала. Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәрендә Кендектең кеҫәһендә гел генә ҡурмас булғаны тураһында уҡып беләбеҙ. Бына мин һеҙгә ҡурмас ҡурып алып килдем. Тәме попкорнды хәтерләтә, тиерһегеҙ. Ҡурмасты услап ашап йөрөгәндәр, ул туҡ тотҡан, юлда боҙолмаған. Алыҫ юлға сыҡҡан кешегә ҡурмас ҡурып ебәрер булғандар.

Ҡурмасты ҡул тирмәне менән тартып, он эшләгәндәр. Шул талҡан оно була. Ҡул тирмәне беҙҙең музейҙа ла бар, өйрәлтеп ҡарарһығыҙ. Таш тирмән ҡурмасты тиҙ генә онға әйләндерә.

Бына минең ҡулымда әҙер талҡан оно. Уға май, шәкәр өҫтәп, талҡан әүәләйбеҙ. Бик туҡлыҡлы аш килеп сыға. Шәкәрҙе үҙегеҙгә күпме оҡшай, шунса һалығыҙ. Ныҡ шәрбәтле лә булмаһын. Сәйгә кәнфит, печенье ҡушып ашағансы, талҡанды ҡулланығыҙ. Уға башҡа тәмләткестәр ҙә ҡушырға була.

Мәҫәлән, ҡуйыртылған һөт, кокос, башҡа емеш киҫәктәре лә ҡушып була. Бына хәҙер әҙер талҡанды өҫтәлгә матурлап ултыртырға кәрәк. Һеҙ миңә ярҙам итерһегеҙ. Бүлеп биргән өлөштәрҙән һындар әүәләгеҙ. Кемдер алма, түңәрәк шарҙар, әкиәт йомроҡайы кеүек итеп эшләр, кемгәлер самолет оҡшар, йәки сейә, кәнфит, әфлисун яһарһығыҙ. Шунан кәнфиттәр ярҙамында биҙәп тә ҡуйһағыҙ, бигерәк тә матур буласаҡ. Кәйеф күтәрелер, ашағы ғына килеп торор.

Балалар алдан әҙерләнгән өҫтәлдәрҙең артына баҫа, уҡытыусы талҡанды эшләй, һуңынан таратып бирә.Улар фигуралар уйлап, әүәләй, биҙәй.

Талҡандың тарихы менән дә танышып китәйек.

Әле XI быуаттарҙа билдәле ғалим-төркиәтсе Мәхмүт Ҡашғари үҙенең билдәле төрөк һүҙлегендә «талҡан» тигән ҡыҙҙырылған он тураһында яҙып ҡалдырған. Уны ул ҡоғормас, йәғни ҡурмас боронғо башҡорттарҙың аҙығы тип атаған. Ҡурмас өҫтәлгә үҙ аллы аҙыҡ булараҡ та бирелгән. Бөгөн ул бөтөнләй онотолған төр. Рус һәм башҡа славян халыҡтарында ла бар ул. Шулай уҡ киле бутҡаһы тип аталған.

Ҡурмас хаҡындағы яҙмалар XIX быуат аҙағында, XX быуат башында ла яҙылған. Көньяҡ башҡорттарында «Ҡурмас ҡурыу» тигән байрам булған. Ул көҙ айҙарында, мул уңыш алғандан һуң үткәрелгән. Хатта боронғо туйҙар ваҡытында ла кейәүҙең ҡулына эҫе ҡурмас һалыр булғандар. Был инде уның сыҙамлылығын һынау.

Ә ауыр һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙа ла яланда ҡалған бойҙай башаҡтарын йыйып өрә, ыумас ыуып эскәндәр. Үҙенә күрә тамаҡ ялғарлыҡ туҡлыҡлы аш булған. Ҡурмас һәм унан яһалған аш төрҙәре ошо йылдарҙа халыҡты туйындырған һәм ҡотҡарған аҙыҡ булыуына бер кем дә шикләнмәй. Ҡурмастан яһалған талҡан да байрам өҫтәленең йәме булған. Уны бишектуй, ҡарғатуй, һабантуй, һырғатуй, кәкүк сәйе һәм туйҙар ваҡытында табындың түренә ҡуйғандар. Был иһә милли аш-һыу төрө генә түгел, ә ифрат шифалы аҙыҡ тип һаналған.

Ҡоро талҡанды киндер тоҡсайҙарҙа, ағас туҙынан яһалған махсус һауыттарҙа һаҡлағандар. Шулай уҡ аҡ йәки ҡайнатылған май ҡушып, талҡан әүәләп тәпәндәрҙә лә тотҡандар.

Оҙаҡ һаҡланылған талҡан юлда, һунарға сыҡҡанда, ураҙа ваҡытында алыштырғыһыҙ аҙыҡ булған.

Легенда буйынса, еңел һәм туҡлыҡлы талҡан оно яугирҙар тарафынан да аҙыҡ итеп ҡулланылған. Шуға уларҙың яраһы тиҙ төҙәлер булған. Ә талҡан файҙаланған ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәсе ҡуйы, буй-һыны зифа булған, тиҙәр. Сөнки тере аҙыҡ тип йөрөтөлгән талҡандың файҙалы матдәләре бик күп.

Шуны әйтергә мөмкин. Әлегеләй заман аш-һыуының бөтә нескәлектәрен белмәгән ата-бабаларыбыҙ тик файҙалы аҙыҡ менән туҡланған.

Бер уҡыусыға алдан эш бирелгән була. Ул талҡандан битлек эшләргә өйрәтә.

Уҡыусы: *Һеҙҙең иғтибарға матурлыҡ битлеген тәҡдим итәм.*

2 калаҡ һоло талҡаны, 1 аш ҡалағы көнбағыш майы, ҡырғыстан үткәрелгән бер алма, 2 калаҡ һөт, 1 калаҡ бал, 1 калаҡ ваҡланған грек сәтләүеген бутарға һәм 20 минуттан йылымыс һыу менән йыуынырға. Ошондай битлекте айына берҙе эшләп торорға кәңәш итәм. Матур булығыҙ, һау-сәләмәт йәшәгеҙ!

Экрандан мәғлүмәт алыу:

- талҡан – туҡлыҡлы, көс биреүсе, дауалау үҙенсәлектәренә эйә ризыҡ, шуға күрә алыҫ сәфәрҙәргә алыр булғандар. Был милли ризыҡ менән туҡланған ата-бабаларыбыҙ быуын, умыртҡа һөйәге ауырыуҙарының ни икәнен дә белмәгән. Ысынлап та, был үҙенсәлекле ризыҡтың файҙаһы бик күп;
- талҡанды эшкәртеү өсөн артыҡ энергия сарыф итмәй, сөнки бойҙайҙың туҡлыҡлы матдәләренең запасы 90 процентҡаса ҡулланыуға яраҡлы әҙер формаға әйләнә: аҡһымдар – аминокислотаға, крахмал – глюкозаға. Шуға ла ул мейе үҫешенә яҡшы йоғонто яһай;
- шәкәр диабеты менән ауырыусыларға талҡан файҙалы;
- талҡан – алтай, бүрәт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, монгол, татар, сыуаш, хакас халыҡтарында таралған аҙыҡ;
- ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлегенә ярҙам итә, тәндәге майҙың үҙләшеүендә ҡатнаша;
- тире өсөн файҙалы, матдәләр алмашыныуын көйләй, организмды нығыта;
- бойҙай аҡһымында организмға кәрәкле аминокислоталар бар, углеводтар, клетчатка, фосфор, калий, кальций, магний, B1, E витаминдары һәм башҡа файҙалы матдәләр етәрлек;
- арышта клетчатка күп, ул ашҡаҙан, эсәк юлдарын таҙарта, төрлө сирҙән һаҡлай. Арыш талҡаны ашағас, кеше үҙен туҡ хис итә, шуға күрә һимермәй;
- калий, магний, фосфор һәм башҡа минераль матдәләргә, витаминға бай. Ҡандағы холестерин менән шәкәр кимәлен нормала тота;
- ер еләге, муйыл, сейә, ҡыҙыл эремсектән дә талҡан эшләргә була. Бигерәк тәмле килеп сыға. Уның өсөн йәйен махсус рәүештә был емештәрҙән эремсек эшләнә һәм, киптерелеп, сепрәк моҡсайҙа һаҡлана (дым тартырға тейеш түгел). Ҡыш көнө мейестә бер аҙ киптереп, тирмәндә тарталар.

Уҡытыусы:

Талҡанды әҙерләүҙең заманса технологияһы менән дә танышып үтәйек. Һәр бер ғаиләлә таш тирмән дә юҡ бит хәҙер.

Талҡанды заман технологиялары үҫешкән заманда – өй шарттарында ла, сәнәғәттә лә эшләргә мөмкин. Йорт хужабикәләре башта бойҙайҙы йыуа, киптерә һәм ҡул тирмәнендә тарта. Ә заман йорттарында йыш осраған кофе

тартыу машинаһын файҙаланырға мөмкин. Он тартыуға ҡарап төрлөсә иләнгән була. Уның эре төрө лә, вағы ла осрай. Был осраҡта кемгә нимә оҡшай. Талҡан онона ҡайнар һыу, аҡ йәки ҡайнатылған май, самалап шәкәр ҡушып йомарластар әүәләйҙәр. Ғәҙәттә, талканға ҡаймаҡ һалмайҙар. Сөнки ул аҙыҡты тиҙ әсетеүе ихтимал, ти уңған хужабикәләр. Оҙаҡ һаҡлауға май ҡушылғаны сифатлыраҡ була. Шулай уҡ кибеттән талҡандың әҙер онон һатып алып та ошо уҡ технология менән эшләргә була.

Бөгөн республиканың көньяғында талҡан эшләү – бәләкәй бизнес өлкәһе өсөн дә абруйлы шөғөлдәрҙең береһе. Йәмғиәттең файҙалы аҙыҡ-түлеккә ынтылыуын иҫәпкә алып, урындағы эшҡыуарҙар был брендты бик оҫта файҙалана.

Талҡан эшләүсе предприятиелар Баймаҡ, Хәйбулла, Учалы райондарында бар, ә ҙур ҡалаларҙа файҙалы аҙыҡ тәҡдим итеүсе махсус кибеттәрҙә һатыла. Талҡанды бәләкәй предприятиелар кимәлендә эшләп сығарыусылар уны бойҙай, ярма ярыу ҡорамалдарында эшләй.

Байрам талканлап сәй эсеү менән тамамлана. Өләсәйҙәрҙе лә йәлеп итергә була был байрамға.Мин Төмән балаларына талкан тартырға өйрәтеү өсөн Альбина апай Исхаҡованы саҡырҙым. Бергәләп сара аҙағында теләк тә әйтелә:

Байрам – туҡлыҡ, ырыҫ билдәһе ул.
Йылдың башы уң булһын,
Ризыҡтары мул булһын,
Игендәр шаулап уңһын,
Ҡурмастар ҡурылып торһон!

IV. Практик эштәр.

Коллегалар, ошо кабинетты төрлө маҡсатта файҙаланып була. Хәҙер беҙ бер уйын да уйнап алайыҡ.

«Башҡортостанды беләһеңме?» уйыны.

Кабинеттың төрлө мөйөшөндә эштәр бирелә. Шуны командалар менән үтәп сығырға тейеш булабыҙ.

1-се туҡталыш. Йылғалар.

Башҡортостанда бөтәһе 600-ҙән ашыу йылға аға. Был йылға иң ҙуры тип һанала. Башҡортостандың иң матур йылғаһы, Рәсәйҙең Волга йылғаһы кеүек үк йырҙарҙа данлана. Украинаның Днепр йылғаһы кеүек ғорурлыҡ хисе тыуҙырырлыҡ йылғабыҙ. Башҡортостандың ниндәй йылғаһы тураһында һүҙ бара? Уны картанан табып күрһәтергә.

Ағиҙел йылғаһы, дөрөҫ!

(Ағиҙел тураһында мәғлүмәт еткерелә).

2-се туҡталыш. Милли эсемлек.

– Балалар, беҙҙең башҡорт халҡы ниндәй милли эсемлек эшләй?

– Эйе, буҙа. Уны нисек яһайҙар? Тәме ниндәй? Бергәләп эсеп ҡарайыҡ.

(Буҙа тураһында мәғлүмәт).

3- сө туҡталыш. Мәмерйә.

– Башҡортостанда ниндәй мәмерйә иң ҙуры? Уның тураһында нимәләр беләһең?

– Шүлгәнташ мәмерйәһе.

– Тағы ниндәй мәмерйәләрҙе беләһең?Һанап кителә.

4-се туҡталыш. Башҡорт лотоһы.

Карточкаларҙы тематикаһы буйынса төркөмләргә:

– башҡорт милли баш кейемдәре

– аяҡ-кейемдәре

– башҡорт халҡының аш-һыуы

– музыка ҡоралдары

– тарихи шәхестәре

– яҙыусылары

– Өфөнөң һәйкәлдәре

5-се туҡталыш. Пазллы келәм.

Башҡорт орнаментлы келәмде пазлдарҙан йыйырға. Биҙәгенең исемен әйтергә.

Ҡусҡар – һарыҡ мөгөҙө. Малсылыҡ менән шөғөлләнеүе тураһында һөйләй

Йөрәк – ҡунаҡсыл халыҡ икәнен аңлата.

Түңәрәк – яҡты ҡояш.

6-сы туҡталыш. Салауат Юлаев һәйкәле.

Һәйкәл тураһында нимәләр беләһең?

Авторын әйтергә.

7-се туҡталыш. Башҡорт халыҡ кейемен дөрөҫ итеп кейергә. Кейемдәрҙең атамаһын әйтергә.

8-се туҡталыш. Башҡорт халҡының бер шәхесенә дан йырларға.

(С. Юлаев, Шайморатов генерал тураһында йыр башҡарырға мөмкин йәки шиғыр һөйләргә).

9-сы туҡталыш. Билдәле шәхестәр.

Портреттарға шәхестәрҙең исемен тоташтырырға.

С. Юлаев

М. Кәрим

З. Биишева.

Һ. Дәүләтшина

Р. Ғарипов

А. Айытҡолов

Р. Туйсина

М. Ғафури

М. Аҡмулла

М. Шайморатов

10-сы туҡталыш. Билдәле урындар.

Билдәле урындарҙы дөрөҫ итеп урынлаштырырға.

М. Ғафури исемендәге театр

М. Аҡмулла һәйкәле

М. Кәрим һәйкәле

Дуҫлыҡ монументы

Еңеү паркы

Арҡайым

Красноусол шифаханаһы

Хөсәйенбәк кәшәнәһе

Ҡурғаҙаҡ минераль һыу шишмәһе

V. Рефлексия.

Кемгә нимә оҡшаны? Нимәләр өçтәр инегеҙ? Төçлө жетондар ярҙамында рефлексия эшләнә**.**

VI. Өй эше.

Вертуаль экскурсиялар ойоштороу өсөн мәғлүмәт тупларға.

Уҡыусыларҙың ҡунаҡтарҙы ҡаршылағанда музейҙарҙағы сығыштарын әҙерләү

VII. Йомғаҡлау.

– Тере саҡта ла кешегә хөрмәт күрһәтеү йөҙөнән музей ойоштороп була. Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы үҙе ҡаршы булманы был тәҡдимгә. Халҡыбыҙҙың үткәненә байҡау яһар өсөн матур бер кабинетты эшләп тә ҡуйҙыҡ. Һәр мәктәптә лә былдай мөйөштө эшләп була, йәш быуынға тәрбиә биреүҙә ҡулланып була, тип иçәпләйем.

Театр сәнғәте һәм драматургия кабинет-музейы

Оҫталыҡ класы

Маҡсат: театр сәнғәте һәм драматургия кабинет-музейы тураһында мәғлүмәт биреү, таныштырыу. Әхлаҡи-эстетик тәрбиә биреү юлдарын асыҡлау, сәхнә аша тормошто аңларға ярҙам итеү.

I. Инеш һүҙ.

Театр сәнғәте һәм драматургия музей-кабинеты.

Бер нисә йыл элек беҙҙең гимназиябыҙҙа шатлыҡлы ваҡиға булды – Драматургия һәм театр сәнғәте музейы асылды. Уҡыу программаһына ингән спектаклдәрҙән күренештәр арткы пландағы **сәхнә коллажында** сағылған. Уҡыусылар яратып уҡыған Мостай Кәримдең «Оҙон- оҙаҡ бала саҡ» автобиографик повесындағы Кендек образын күрергә була. Был ролде ҡасандыр РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы, С Юлаев исемендәге премия лауреаты Ханов Олег Закир улы уйнаған. Эргәһендә «Ай тотолған төндә» трагедияһындағы ырыу һәм ғаилә башлығы Тәңкәбикә. Был матур ролдә Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Сара Абдулхай ҡыҙы Буранбаева уйнай. Артабан «Айгөл иле» драмаһында төп героиняны уйнаған Нурия Ирсаеваны ла күрергә була. «Ташлама утты, Прометей**!**» трагедияһын әле театр үҙенең 100 йыллығына бағышлап, яңыртты.

Шулай уҡ ошо паннола Баязит Бикбайҙың «Салауат» трагедияһының төп ролен башҡарыусы СССР-ҙың халыҡ артисы, Башҡортостандың С. Юлаев исемендәге премияһы лауреаты Арыҫлан Мөбәрәковты күрәбеҙ. А. Мөбәрәковтың тормош юлы һәм ижады менән танышыу мәктәп программаһына ингән. Б. Бикбайҙың «Ҡарлуғас» драмаһы 10-сы класта үтелә. Мөхәмәтша Буранғоловтың «Башҡорт туйы» драмаһының төп ролендә Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшевты ла әйтеп үтергә кәрәк. Паннола был спектаклдән күренештәр ҙә бар.

Музейҙағы костюмдар

Музейҙа әле экспонаттар йылдан-йыл туплана, байытыла бара. Шуларҙың араһында бик иҫтәлеклеһе – Зәки Вәлиди тураһындағы спектаклдә төп геройҙың кейеп уйнаған костюмы. «Ай тотолған төндө» спектакленән Тәңкәбикәнең костюмы ла балаларға тәьҫир итә. Уларҙы беҙгә артистар Илдар Ғүмәров менән Сара Буранбаева тапшырҙы. Артистарҙың улдары беҙҙең гимназияла уҡый.

Драматургтар портреттары

Был кабинет-музейҙа драматургтарҙың портреттары бер рәт булып тора. Тәүге драматургтарҙан башлап, әлеге көндә билдәлелек ала барыусылар ҙа эҙмә-эҙлекле итеп ҡуйылған.Театр буклеттары, афишалары ҡараған спектаклдәрҙе, уҡыған драмаларҙы иҫкә төшөрөү өсөн файҙалы. Мостай Кәрим исемендәге Йәштәр театры һәм Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры менән тығыҙ теләктәшлек итәбеҙ, музейыбыҙ артабан да байыр тигән уйҙабыҙ. Мәктәп программаһына ингән драма әҫәрҙәре:

М. Ғафури «Ҡара йөҙҙәр», М Буранғолов «Башҡорт туйы», М Кәрим «Ай тотолған төндө», «Ташлама утты, Прометей!», «Айгөл иле», Б. Бикбай «Ҡарлуғас», А. Абдуллин «Ун өсөнсө председатель».

Кабинет-музейҙа дәрес

Әлеге ваҡытта ла ошо әҫәрҙәр буйынса ҡуйылған спектаклдәр театр сәхнәләрендә шаулап бара. Беҙ драма әҫәрҙәрен үткән саҡта дәрес үткәреп, тулыһынса театр сәнғәте менән яҡындан танышабыҙ, бындағы мөхит үҙенән-үҙе беҙҙе матурлыҡҡа саҡыра, театр донъяһына ылыҡтыра.

Мин бөгөн һеҙҙең менән, коллегалар, инсценировкаға әҙерлек этабын башҡарып ҡарарға саҡырам. Алдан сәхнәләштереүгә кәрәкле кейемдәр, атрибуттар әҙерләп ҡуябыҙ.

II. Практик эш. Театр сәнғәте һәм драматургия кабинет-музейында Мостай Кәримдең «Ҡара һыуҙар» поэмаһы буйынса инсценировка.

Ҡатнашалар: шағир, Яҡуп, ҡатын, һалдат, батальон командиры, һалдаттар.

Йыһазландырыу: радио, «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа», «Батырҙар йыры», «Изге һуғыш» йырҙары, һалдат кейемдәре, командир кейеме, ҡара шәл, өскөл хаттар.

Шағир өҫтәл артында ултыра.

Шағир. Көнөн яуа, төнөн яуа,
Аҙна яуа бер тоташтан,
Әйтерһең, күк ҡолаған да,
Һауа менән ер тоташҡан.
Ҡайҙа ҡояш, ай, йондоҙҙар?
Күкте ташлап ҡайҙа киткән?
Һөйгән йәрһеҙ йәшәү кеүек,
Ай-ҡояшһыҙ ҡыйын икән.
Көнөн яуа, төнөн яуа…
Ер күшеккән, ер ҡаңғыра.
Мәтеләнгән һалҡын ергә
Бер баҫырға сирҡандыра.
Сирҡандыра? Тиреҥ тамған,
Ҡаныҥ аҡҡан ошо ерме?
Дуҫтарыңдың һөйәктәре
Төйәк тапҡан ошо ерме?
Ошо ерме? һин һуң уны
Иңләп-буйлап үтмәнеңме?
Тоғролоҡҡа анттар биреп,
Йәш аралаш үпмәнеңме?
Әжәл һине ҙләгәндә,
Берәй саҡ ул шик һалдымы?
Хатта ҡурҡып һыйынғанда,
Ул һуң һинән сирҡандымы?
Һин шуларҙы оноттоңмо,
Оноттоңмо йылы өйҙә?
Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа,
Түбәләрҙән һыуҙар аға…

Шағир урынынан тора, радионы ҡабыҙа. Унан «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа» йыры тапшырыла. Йыр тамамлана. Радионы һүндерә. Ҡатын күренә. Туҡтап ҡала. Шағир уны шәйләп ала. Бер аҙ һүҙһеҙ торалар.

Шағир. Һеҙ тартынмағыҙ, үтеп китегеҙ.

Ҡатын. Уйларһығыҙ, ниндәй яфа
Килтерҙе икән тип был бәндә.
Дөрөҫ, шатлыҡ бүлешергә
Килмәҫ кеше былдай мәлдә.
Юлдар үттем, күңелемә
Ер күтәрмәҫ өмөт тейәп,
Ошо усаҡ өмөтөмә
Һуңғы нөктә, һуңғы төйәк.
Йә, ул шунан йылы алыр,
Йәки янып көлгә ҡалыр.

Шағир. Әйтегеҙсе, һеҙ кем?

Ҡатын. Мин – Сыҙамлыҡ.
Сикһеҙ юлға сыҡҡан юлсымын,
Һағыш менән оҙаҡ еңештем мин,
Хәҙер йонсоном…
Шағир. Ниндәй яҙмыш һине бында килтерҙе?
Ҡатын. Мин – тол кәләш,
Ҡатын булмай етем ҡалғанмын.
Ун йыл буйы шуға ышанманым…
Ышанмайым. Булмаç… Ялғандыр!..
Шағир. Һеҙ тынысланығыҙ. Ултырығыҙ ҙа аңлатыбыраҡ һөйләгеҙ.
Ҡатын. Мин бит һөйәм уны. Кис ҡайтмаһа,
Ҡайтыр тинем таңдар атҡанда;
Аш ултыртһам, ике ҡашыҡ ҡуйҙым,
Ике мендәр һалдым ятҡанда.
Һәм…Һаман да шулай… Ун йыл буйы
Бөтә илде ҡыҙырып атланым,
Тереләр араһында осратманым,
Зыяраттарҙа ҡәберен тапманым.
Шағир. Бик ауыр икән ҡайғығыҙ,
Хәттин ашҡан борсолоуығыҙ.
Ҡатын. Әйтерлектәр түгел.
Хатта дошмандарҙың ҡәбере бар,
Өңөлһә лә, әрем баçһа ла,
Кеше энә түгел юғалырға…
Эҙе ҡала тамсы тамһа ла.
Шағир. Шулай. Аяныс хәл. Ә кем һуң ул?
Ҡатын. Яҡуп атлы егет ине.
Шағир. Яҡуп атлы егет?
Ҡатын. Эйе, Яҡуп. Белә тиҙәр уны һеҙ генә.
Шағир. Яҡуп атлы… Иçке йәрәхәткә теймәгеҙ.
Ҡатын. Йыуатырлыҡ, йәки илатырлыҡ
Һүҙ әйтегеҙ, бары һүҙ генә.
Шағир. Ҡайғығыҙ баштан ашҡан былай ҙа.
Ҡатын. Мин сыҙармын, зинһар, Һөйләгеҙ!
Шағир. Һағышлының күңеле буш түгел,
Һәм йөрәге тере көткәндең.
Шуларҙан да мәхрүм ҡалһағыҙ һуң?
Ҡатын. Мин ҡурҡыуҙың сиген үткәнмен,
Түгер йәштәремде түккәнмен, һөйләгеҙ.
Шағир. Ярай, улайһа, һөйләйем.
Ҡәберлеләр ятҡан ерҙә, эйе, уның ҡәбере юҡ.
Ә тереләр араһында үлектәрҙең ҡәҙере юҡ…
«Изге һуғыш» көйө. Иң тәүҙә командир, аҙаҡ аллы-артлы һалдаттар сыға. Көй тамамлана.

Командир. Туғандар! Батальон алды приказ:

«Дошман яуын ошо ҡалҡыулыҡта

Кискә тиклем туҡтатырға.

Артабан, эңер төшкәс, юл алырға.

Төнгә инеп юғалырға».

Туғандар! Тыуған ил өсөн, тыуған ер өсөн бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә. Һуңғы патронғаса алышырға. Хәҙер позицияларҙы нығытырға.

Һалдаттар позицияла. Берәү хат яҙа, берәү ҡоралын ҡараштыра. Командир картала ниҙер билдәләй: уның үҙенең эше бар.

Һалдат. Ну, фашист, килеп кенә ҡара. Арт һабағыңды уҡытырмын.

Яҡуп. Ай-һай, ул беҙҙең һабаҡты уҡыта түгелме?

Һалдат. Һин ни һөйләйһең, әллә һаташаһыңмы?

Яҡуп. Юҡ, һаташмайым. Ана, үткән алыштан һуң ғына күпме егеттәребеҙ туҡмас кеүек ҡырылды. Ә яралылар күпме?

Һалдат. Ә бит барыбер дошманға баш эймәнек, уны сигенергә мәжбүр иттек.

Яҡуп. Баш эймәү менәнме ни? Тағы ла хәтәр һуғыш, ҡан ҡойош буласаҡ. Тағы күптәребеҙ ғәзиз башын һаласаҡ. Үләбеҙме, ҡалабыҙмы – уны кем белә?

Һалдат. Тыуған ер өсөн батырҙарса һуғышып үлеү – ир-егеттәрҙең борон-борондан килгән изге эше. Шулай булғас, һис үкенерлек түгел беҙгә. Үҙ батырҙарын Ватаныбыҙ бер ҡасан да онотмаясаҡ.

Яҡуп. Онотмау менәнме ни?

Кемгә файҙа, иртәгә кис ҡоҙғон ҡунһа һөйәгемә.

Мин үҙемә кәрәк түгел, мин кәрәкмен һөйгәнемә.

Аңлайһыңмы, һөйгәнемә?

Һалдат. Аңлайым, әммә әлеге мәлдә иң тәү бурыс – Ватанды һаҡлау, ғәзиз еребеҙҙе фашист яуыздарҙан таҙартыу. Ошонан да юҡ ул изге нәмә.

Яҡуп. Был изгелектән ни файҙа,

Әгәр үлеп ҡалһам бына бында.

Минең өсөн ҡиммәт ғүмер.

Хәбәр бирмәй, ҡәбер күрмәй

Серегәнсе бында ятып,

Әсир төшөп тере ҡалыу мең ҡат артыҡ.

Һалдат. Ах, һин, хаин… *(Яғаһынан матҡып ала).*

Шул саҡ команда: «Батальон, к бою!» Атыш тауыштары. Көсөргәнешле алыш күренеше. Якуп артка ҡасырға уҡтала. Һалдат уны кире этәрә. Бер аҙҙан Якуп алға шыуыша, автоматын ырғыта, ҡулдарын күтәрә, ергә тубыҡлана. Шул саҡта дошман пуляһы тейеп ергә ауа. Атыш тамамлана. «Батырҙар йыры» ишетелә. Һалдаттар тороп баҫа. Улар батырҙар рухын һынландыра. Өскөл хаттар ергә ҡойола. Йыр тамамланыуға артка сигенеп яй ғына юғалалар.

Шағир. Бына шулай. Алғы танк уға табан

Борола биреп уҙып китте.

Бер ер ҡорто урынына ыһ та итмәй
Иҙеп китте.
Ә бер аҙҙан үләндәге уның һуңғы эҙе кипте.
<u>Ҡатын.</u> Ун йыл буйы кемде көткәнмен,
Кемде йәрем тип һөйгәнмен.
Хәҙер белдем. Өмөттәрем осто елгә,
Һатлыҡ йәнгә, хәшәрәткә
Юҡ урын башҡаса күңелемдә.
<u>Шағир.</u> Түҙ, һеңлем, ғорур бул,
Хуш хәҙергә, һау бул.

Моңһоу көй. Ҡатын тора. Башын ғорур тотоп сығып китә. Арҡаһынан һыпырылып шәле төшөп ҡала.

III. Өй эше.

Музейға саҡырыу флайерҙары әҙерләү.

Музей тураһында буклет эшләү.

IV. Рефлексия.

Музейҙа ниндәй яңылыҡ белдең?

Уҡыусыларға һәм уҡытыусыларға ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?

V. Йомғаҡлау.

Хәрби дан кабинет-музейы

Оҫталыҡ класы

Маҡсат: Хәрби дан кабинет-музейы тураһында мәғлүмәт биреү, таныштырыу. Башҡорт яугирҙарының үткәненә байҡау яһау, күренекле шәхестәрҙең хәрби юлын өйрәнеү. Тыуған илебеҙ менән ғорурланыу, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү, тәжрибә уртаҡлашыу.

I. Инеш һүҙ.

Хәрби дан кабинет-музейы.

«Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын».

Халыҡ йырынан алынған был юлдарҙа күпме мәғәнә һалынған! Халыҡ ижады - үҙе бер тәрбиә. Илһөйәрлек тәрбиәһе алабыҙ, халыҡ аҡылын һеңдереп үҫәбеҙ.

Тап ошо йырҙың юлдары гимназиябыҙҙың Хәрби дан кабинет-музейының девизы итеп һайланған. Был музейҙы Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына ҡарата астыҡ. Экспонаттарҙы уҡыусылар, ата-әсәләр, гимназия хеҙмәткәрҙәре килтерҙе.

Стенала әҙәби әҫәрҙәр аша таныш булған башҡорт халҡының бөйөк батырҙарының фоторәсемдәре бер рәт булып теҙелеп киткән. Тәүҙә Урал батыр тора**. «Урал батыр» эпосын** 9-сы класта уҡыйбыҙ, хатта әлеге ваҡытта гимназиябыҙҙа был ҡомартҡы әҫәре менән беренсе класта уҡ танышалар. Дәрестән тыш уҡыу мәлендә башланғыс кластар өлөшләп-өлөшләп эпос менән танышалар.Уға айырым программа яҙылған.

«Урал батыр» спектаклен мәктәп менән барып ҡараныҡ. Шул ваҡыт бер бала шундай һорау бирҙе: «Ни өсөн Урал батырҙың кабинеттағы фотоһында сәсе оҙон, ә спектаклдә, киреһенсә, Шүлгәндеке оҙон?» - тип. Урал батырҙың фотоһы һаҡланмауы, уны башҡорт батырына яҡынлаштырып төшөрөлгән рәссам һүрәте икәнен аңлатырға тура килде. Күрәһегеҙме, стендта торған бөтә яңылыҡтар, мәғлүмәттәр менән балалар ҡыҙыҡһына, ошо тарихи урын тәрбиә үҙәге лә булып тора.

Алдар батыр Иҫәкәйев менән 7-се класта **Ғайса Хөсәйеновтың «Алдар батыр ҡиссаһын»** уҡып танышабыҙ. Башҡорт халҡының тарихы ҙур ваҡиғаларға һәм тарихи шәхестәргә ғәжәйеп бай. Уның азатлыҡ өсөн көрәш тарихын алғанда ғына ла, сәмле көрәш ҡандары менән яҙылған тарих биттәре, исемдәре бөтә Рәсәйгә билдәле, атаҡлы батырҙары, данлы кешеләре әллә ни хәтле. Ирек өсөн яуға күтәрелгән һәм шул юлда баштарын һалған Алдар, Күсем, Ҡараһаҡал, Батырша, Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Бәҙәрғол Юнаев кеүек тарихи шәхестәре менән башҡорт халҡы үҙе генә түгел, бүтән халыҡтар ҙа хаҡлы ғорурлана ала. Улар барыһы ла ил батырҙары, башҡорттоң иң ҡәҙерле улдары. Шул уҙамандар араһында Алдар батыр Иҫәнгилдин – иң өлкән ил ағаһы. Ул 17 быуат аҙаҡтарында Рәсәйҙең именлеген яҡлап Ҡырым һәм Азов походтарында ҡатнашҡан яугир. Ғайса Хөсәйеновтың батырға арналған әҫәрендә Азов походындағы батырлыҡтары, яу күренештәре һүрәтләнә.

Ҡараһаҡал тураһында Булат Рафиҡовтың романын уҡыйбыҙ. Ҡараһаҡал – (ысын исеме Миндеғол Юлаев , ?-1741, башҡа сығанаҡтар буйынса ?- 1749.). (башҡ. Ҡараһаҡал, татар. Qarasaqal, Карасакал, ҡаҙ. Қарасақал). Ағаһының йәшерен мәкерлеге арҡаһында тәхеттән мәхрүм булған жунғар ханы тип, ялған исем менән йөрөүсе. Хәбәрһеҙ юғала.

Башҡорт фольклорында (йырҙарҙа, риүәйәттәрҙә**) Салауат Юлаев** киң билдәле.

1552 йылда Иван IV Ҡазанды алып, уның ханлығын еңгәндән һуң, Иван батша башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғын, динен, йолаларын һаҡларға вәғәҙә бирә. Әммә уның заты, Рюриковичтар династияһы власть башынан китеүе була – Романовтар династияһы тәхеткә килә (1613 йыл). Шунан башлап башҡорттарҙың Аҡ бей батша таныған хоҡуҡтары сикләнә бара, ер тәләфләнә, властар баш-баштаҡлыҡ итә, Башҡортостанға башҡа халыҡтар күсереп ултыртыла. Унда заводтар, ҡәлғәләр төҙөй башлайҙар. Һөҙөмтәлә башҡорт халҡы ихтилалдарға күтәрелә: XVII-XVIII быуаттар буйы Башҡортостанда тынғылыҡ бөтә. Академик М. К. Любавский яҙыуынса, « *шул дәүер эсендә, үҙҙәренең хоҡуҡтарын даулап, башҡорттар һымаҡ ихтилалға күп күтәрелгән халыҡ Рәсәйҙә бер ҡайҙа ла бер ҡасан да булмаған».*

Ҡараһаҡал тураһында танылған урыҫ ғалимы П. И. Рычков:

«*аҡыллы, мауыҡтырғыс һәм дәлилле итеп һөйләүсе, дөрөҫ йәшәүсе, динле*», тип яҙа, ә XIX быуатта йәшәгән Р. Г. Игнатьев «*яҡшы фекерләүсе, ҡыйыу, динле, Ҡөрьәнде һәм ғәрәп телен яҡшы белгән башҡорт»* тип яҙып ҡалдырған. Ҡараһаҡал – 30-сы йылдарҙа Мәккә менән Мәҙинәгә хаж ҡылған мосолман.

Батырша тураһында Ғайса Хөсәйеновтың романын уҡығас, батырлыҡтарына хайран ҡалабыҙ.

Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә» романы менән 8-се класта танышабыҙ. Кинйә Арыҫлановтың тормошон, яу йылдарын күҙ алдына тулы

баҫтыра алабыҙ. Музейҙа Кинйәнең портреты, уның тураһында мәғлүмәттәр урынлаштырылған. Рус телле балалар өсөн рус телендә роман бар.

Салауат Юлаевтың тормошо һәм ижады менән бәләкәй кластарҙа уҡ таныша башлайбыҙ. Музейҙа уның тураһында ла бай материал тупланған.

Ҡаһым Мырҙашевтың батырлыҡтарын сағылдырған әҫәрҙәрҙән **Баязит Бикбайҙың «Ҡаһым түрә» драмаһын**, **Яныбай Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары»** исемле романын индерәбеҙ. Был әҫәрҙәр мәктәп программаһына индерелгән. Музейҙың экспонаттары араһында ошо осорҙо сағылдырғандары ла бар.

1812 йылғы һуғышта ҡатнашҡан яугирҙарҙың уҡ-һаҙаҡтарын, тимер көлдәктәрен, хатта аттың ағас эйәрен күрергә була. Башҡорттарҙың Парижғаса барып етеүҙәре һоҡландыра.

Муса Мортазин исеме лә һәммәбеҙгә таныш. **Р.Солтангәрәевтың «Осто бөркөт»** әҫәрендәге башҡорт батырын нығыраҡ хәтерҙә ҡалдырырға музейҙағы мәғлүмәттәр ярҙамға килә.

«*Муса Мортазиндың ғүмер юлы – халыҡ бәхете өсөн көрәш һәм халыҡ мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө. Милләтебеҙҙең XX быуат тарихында уны, еңелеү белмәҫ халыҡ полководецын, яңы дәүерҙең Салауаты тип атарға хаҡлыбыҙ»,*– ти Рәшит Шәкүр.

Муса Мортазин бар йәшмышы менән хәрби кеше. Ул ябай һалдаттан алып, I Бөтә донъя һуғышы, Граждандар һуғышы юлдарын үткән, комбриг дәрәжәһенә күтәрелгән, юғары хәрби академияларҙа һабаҡ алған ҙур тәжрибәле һәм юғары белемле командир. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәт уға ижади һәләт, уй-хыял осҡондарын да һис йәлләмәгән.

Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы, хәрби командир, дәүләт эшмәкәре Муса Мортазиндың тыуыуына 125 йыл булды. Башҡорт халҡының ҡаһарман улы тураһында Ғәзим Шафиҡов, Рәшит Шәкүр, Рәүеф Насиров очерктар яҙһа, Яныбай Хамматов «Комбриг Мортазин» романын, Мәүлит Ямалетдинов

«Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым», Рәшит Солтангәрәев «Осто бөркөт» повестарын яҙҙы.

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Солтангәрәевтың Муса Мортазин яҙмышына арналған «Осто бөркөт» повесы барыбыҙға ла оҡшаны.

Уға 125 йыл тулған ваҡытта музейҙа онлайн дәрес үтте. Өфө ҡалаһының музейҙары хеҙмәткәрҙәре интернет ярҙамында дәрескә тура сыға алдылар. Музейҙарҙа һаҡланған мәғлүмәттәр ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булды. Ул мәғлүмәттәрҙе беҙгә тарихсы Азат Ярмуллин таныштырҙы.

Миңлеғәле Ғөбәйҙуллиндың тормошон **Яныбай Хаматовтың «Тыуған көн»** романы аша өйрәнеп беләбеҙ. Музейыбыҙҙа Александр Матросов менән Миңлеғәле Ғөбәйҙуллинға ла арналған мөйөш бар. Бөйөк Ватан һуғышының афәттәрен күҙ алдына килтерергә ошондай экспонаттар ярҙам итә: һалдат фляжкаһы, снаряд ярсыҡтары, Рейхстагҡа ҡаҙаған байраҡтың күсермәһе, мылтыҡтар һәм башҡалар.

Зәки Вәлидиҙең тормошон һәм ижадын 10-сы класта өйрәнәбеҙ. Уның **«Хәтирәләр»** китабынан өҙөктәр менән танышабыҙ. Музейҙа Башҡорт АССР-н төҙөүҙә әүҙемлек күрһәткән Вәлидиҙең тормошона арналған материалдар ҙа һаҡлана. Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштергәндә музей мәғлүмәттәре бик файҙалы.

Был Хәрби дан музейында **Миңлеғәле Шайморатовҡа** арналған стенд бар. Рәсәй геройы исеменә лайыҡ шәхес ул Шайморатов генерал. Даян Мурзинға, Муса Гәрәевҡа арналған стендтарҙың булыуы музей йөкмәткеһен тулыландыра. Был геройҙар тураһында ла әҙәби әҫәрҙәр яҙылған. Айырыуса мауыҡтырғыс булғандары – беҙҙең эраға тиклем IV-VIII быуаттарҙа Ҡара Абыҙ яуынан һуң һәм Блюхер, Калмыков етәкселегендәге ғәскәрҙәрҙең беҙҙең ерлектә табылған һуғыш ҡоралдары, боронғо йөн

иләгес, кәрәсин лампаһы, киркә, ураҡ, башҡа төрлө эш ҡоралдары һәм башҡалар – быларҙың барыһында ла тарих һаҡлана.

Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығы алдынан музейҙа тағы бер стеллаж тултырылды. Ул **Ҡотдос Латыповҡа** арнала. Ул – Советтар Союзы геройы, ейәне беҙҙә уҡыны. Ҡартатаһының фотоларын, китабын, документтар күсермәһен, хатта ҡайһы береһенең төп нөсхәһе бар, алып килде. Был стенд та балаларға фәнни эштәр башҡарғанда ярҙам итәсәк.

Шулай уҡ бер балдаҡ тарихын һөйләп үтмәксемен. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Гитлер үҙенең иң шәп ярҙамсыларына балдаҡ һуҡтырып тапшырған икән. Бер уҡыусының атаһы командировкаһы ваҡытында шундай балдаҡ табып ала. Балдаҡта мәғлүмәт тә бар. Шул балдаҡты беҙҙең музейға тапшырҙылар.

Музейҙа тематик күргәҙмәләр һәм төрлө саралар үткәрелеп тора. Мәҫәлән, Дан музейында интернационалистар менән осрашыу, Муса Мортазиндың тыуған көнөнә арнап онлайн дәрес, ветерандар менән осрашыуҙар үтте. Беҙҙең гимназияның МВД класы бар, улар формала йөрөп уҡыйҙар, сентябрҙә присяга – ант биреү йәки вәғәҙә биреү үтә. Үҙенә күрә ҙур байрам был.

II. Практик өлөш.

Интеллектуаль уйын.

1. Алыҫтарҙан ағарып, ай, күренгән

Ирәндеккәй тауының аҡ ташы.

Ҡайҙа ғына ла бармай,ниҙәр күрмәй

Ир-егеткәй менән ат башы!

Ниндәй башҡорт халыҡ йыры?

«Азамат» йыры

2. 1557 йылда ниндәй тарихи ваҡиға була?

Рус дәүләтенә ҡушылыу. Был ваҡиғаға бәйле баш ҡалала ниндәй билдәле урын бар?

3. Башҡорттар рустарҙың ниндәй хәрби походтарында ҡатнашҡан?

1558-1583 йылдар-Ливон һуғышы

1570-1572 йылдар – Ҡырым менән һуғыш

1611-1612 йылдар – Поляк-швед интервенттарына ҡаршы һуғыш

1612 йыл – Мәскәүҙе поляк-литва илбаҫарҙарынан азат итеү

1695-1696 йылдар – Азов походы

1700-1721 йылдар – Төньяҡ һуғышы

1756-1763 йылдар – Рәсәйҙең Пруссия менән һуғышы (2500 башҡорт)

1772 йыл-Польшалағы һуғыш (300 башҡорт)

1805-1809 йылдар – Франция менән барған һуғыш (7 мең башҡорт)

1812-1814 йылдар – Наполеон армияһына ҡаршы һуғыш (14840 башҡорт)

1828-1829 йылдар – Рус-төрөк һуғышы (ике полк)

1830-1831 йылдар – Белоруссияла һәм Польшала поляк хәрби әсирҙәрен оҙатҡанда этап хеҙмәтен үтәү

1839 йыл – Хиуаға ойошторолған яу. (3700 башҡорттоң 2 меңе үлеп ҡала. В. А. Первскийҙың беренсе походы.

1853 йыл – Урта Азияға яуға сығыу. (400-ләп башҡорт. В. А. Перовскийҙың Урта Азияға икенсе походы)

1853-1856 йылдар – Ҡырым һуғышы ваҡытында Балтик буйы ярҙарын, Севастополде һаҡлауҙа ике полк ҡатнаша)

4.Я.Хамматовтың «Төнъяк амурҙары» әҙәрендә нисәнсе йылғы һуғыш тураһында һүҙ бара? Уның тураһында нимәләр беләһегеҙ?

1812-1814 йылғы һуғыш.

5.1812 йылғы Ватан һуғышында нисә башҡорт ҡатнашҡан?

28 полк. Бер полкта 500 ябай кеше, 30 командирҙар составы. Бөтәһе - 14840 башҡорт ҡатнаша.

6. Башҡорт ғәскәре етәкселәрен һанап бирегеҙ

С. Юлаев, Шайморатов генерал, Таһир Күсимов, Ҡаһым түрә, Батырша, Алдар батыр Иҫәнгилдин....

7. Ҡаһым түрә тураһында нимәләр беләһегеҙ? Юрматы ырыуы башҡорто, һуғыш башланғанда уға 34 йәш була. Парижғаса барып етә.

8. *Башҡорт һыбайлылары французларҙы ҡыуып Европа буйлап Польша, Германия ерҙәрендә ниндәй ҡалаларҙы алыуҙа ҡатнаша?*

Лейпциг, Варшава, Берлин, Дрезден, Гамбург, Веймар ҡалалары

9.-Мин-яу ҡыҙы! Кемдең һүҙҙәре?

Аҫылбикә, «Ҡаһым түрә» драмаһынан. Мәргән ҡыҙ, Йәнтүрәнең ҡатыны (Зефировтың «Йәнтүрә» әҫәре).

10. *Любезные вы мои, башкиры! Кемдең һүҙҙәре?*

Кутузовтыҡы.

11. Французларға ҡаршы Ватан һуғышы, яугир ир-егеттәр тураһында ниндәй әҫәрҙәр бар?

Я.Хамматов «Төньяҡ амурҙары», Б.Бикбай «Ҡаһым түрә», «Любизар», «Француз көйө», «Байыҡ», «Ҡаһым түрә», «Икенсе әрме» халыҡ йырҙары.

12. Башҡорттар, 1812 йылғы һуғыш бөткәс, Париждан ҡайтышлай ниндәй билдәле шәхес менән осраша?

Немец шағиры Иоганн Гёте.

Хәҙер актуаль булған тема – генерал Миңлеғәле Шайморатов тураһында әҙерәк туҡталмаҡсымын. Быйыл мин бер уҡыусы менән уның тураһында «Шайморатов образы әҙәбиәттә» исемле эҙләнеү эше башҡармаҡсыбыҙ. Әле проект эше тип әйтерлек презентация эшләнек. Һеҙгә, коллегалар, шул презентацияны күрһәтеп үтмәксемен. Артабан ошо оҫталыҡ кластары дауамында бәләкәй генә өй эштәре бирелер. Бөгөн һеҙгә бер тарихи шәхескә проект эше – 10 слайдтан торған презентация эшләргә өй эше бирмәксемен.

Мәҫәлән, Муса Мортазинға, Кинйә Арыҫлановҡа, Зәки Вәлидигә, Батыршаға, Ҡаһым түрәгә, Салауат Юлаевҡа, Алдар Иҫәкәевҡа һәм башҡаларға эшләргә була.

Эштең практик өлөшө.

1. Экспонаттарҙың картотекаһы.
2. Гимназия сайтында һәм википедияла гимназия музейҙары тураһында мәғлүмәт.

III. Өй эше.

10 слайдтан торған бер тарихи шәхескә презентация эшләргә.

IV. Йомғаҡлау. Музейҙарҙың йәш быуынды тәрбиәләүҙәге роле баһалап бөткөһөҙ. Тарихты беләйек. Үткәнен белгәндең генә киләсәге матур. Беҙ халҡыбыҙҙың шәхестәрен белергә, тормошон өйрәнергә, улар хаҡындағы яҡты иҫтәлекте килер быуынға еткерергә бурыслыбыҙ.

Мин кешеләр араһында, кешеләр минең менән

Класс сәғәте

1. Ойоштороу әңгәмәһе.

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Мин бөгөн бик ҡыҙыҡ әкиәткә тап булдым. Шуны һеҙгә лә уҡыйым әле. Һеҙ иғтибар менән тыңлап ултырығыҙ, һөйләшеү ваҡытында әүҙем булырһығыҙ.

Һүҙҙән эш яҡшы

Ҡырмыҫҡа балалары әҙерәк ҙурайғас, аталары быларға:

– Бөгөн һеҙ табыш артынан барасаҡһығыҙ.Тик һаҡ булығыҙ, алыҫҡа китмәгеҙ, – тигән.

– Борсолма, атай, мин аҙашмаясаҡмын һәм иң тәмле еләкте алып ҡайтасаҡмын, – тигән береһе.

– Мин бүрәнә һымаҡ ҙ-у-ур һалам алып ҡайтасаҡмын, – тип маҡтанған икенсеһе.

– Ә мин һаламды ла, еләкте лә бергә килтерәсәкмен,-тигән өсөнсөһө.

Дүртенсе ҡырмыҫҡа балаһы ғына бер нәмә лә өндәшмәгән.

– Һүҙҙән эш яҡшы, – тигән аталары. – Шуны хәтерегеҙҙән сығармағыҙ.

Бер сәғәт үткәс, тәүге ҡырмыҫҡа әйләнеп ҡайтҡан.

– Атай, минең еләгемде себен ашаған, – тип зарланған ул.

Икенсе ҡырмыҫҡа балаһы ике сәғәттән ҡайтҡан да йәне көйөп аңлата башлаған:

– Атай, минең һаламымды ниндәйҙер бер ҡуңыҙ алып киткән.

Дүртенсе ҡырмыҫҡа балаһы кискә генә әйләнеп килгән. Ул һаламға ҡыҫтырылған еләкте һәм өсөнсө туғанын алып ҡайтҡан.

– Атай, мин башта һалам таптым, шунан еләкте күрҙем. Ояға яҡынлашып килгәндә соҡорҙан ярҙамға саҡырған тауышты ишеттем. Ул минең туғаным ине. Тиҙ генә һаламды һуҙҙым да тартып сығарҙым.

– Әгәр соҡорға йығылмаһам булһам, мин дә алып ҡайтыр инем, тип ләпелдәп маташҡан тегенеһе.

– Нимәгә һәләтле икәнеңде иртәгә күрһәтерһең, – тип бүлдергән уны атаһы.

II. Әкиәт буйынса әңгәмә.

– Уҡыусылар, һеҙгә әкиәт оҡшанымы? Ошо ҡырмыҫҡаларҙың һәр береһенең һыҙаттарын билдәләйек әле. Беренсе ҡырмыҫҡа һеҙҙең ҡарамаҡҡа ниндәй сифаттарға эйә?

– Үҙ-үҙенә артыҡ ышаныусан, ҡабалан, алдан вәғәҙә биреүсән, эшен еренә еткермәй, иң алдан ҡайтып инә. Зарланыусан. Ҡабаланған ҡабырғаһын һындырған, ти халыҡ мәҡәле.

Икенсе ҡырмыҫҡаға ҡылыҡһырлама бирәйек әле, уҡыусылар. Ул ниндәйерәк?

– Маҡтансыҡ, һәр саҡ алдан булырға тырышып йөрөй, ләкин эште үтәй алмай. Хәленән килмәй, буш һүҙ һөйләй. Башҡаларҙан өҫтөн булырға тырыша, ләкин уйламай хәл итә, ҡупырыҡ, маҡтансыҡ.

Маҡтантаныу – хур итә, тыйнаҡлыҡҡа ни етә? Эш башлағанда маҡтанма, ти башҡорт халыҡ мәҡәлдәре.

– Өсөнсө ҡырмыҫҡа тураһында нимә әйтерһегеҙ?

Һүҙ менән бутҡа бешерә. Туғандарына көнләшеп тә ҡарай, алда булырға тырыша. Көсөн һынап ҡарамайса эш итә. Тәүәккәл, ләкин бигерәк ҡабалан. Бер кемгә лә бирешергә теләмәй, хатта көлкөгә ҡалһа ла үҙ һүҙен һөйләй. Сәмсел. Халыҡта бындайҙарҙы ҡулапаш, һынһыҙ, ибәтәйһеҙ, әшәүәтһеҙ, рәтһеҙ тиҙәр.

– Дүртенсе ҡырмыҫҡаға ниндәй сифаттар хас?

Эште уйлап эшләй. Алдан вәғәҙә бирмәй, уйлап һөйләй, маҡтанмай. Ете ҡат үлсәй, бер ҡат киҫә.

Ата ҡырмыҫҡаны ла ҡылыҡһырлап китәйек әле.

Бик аҡыллы, тәжрибәле. Алдын-артын ҡарап, теүәлләп йәшәй, хәстәрлекле, иғтибарлы, теүәл. Эшкә әрһеҙ, зирәк, уңған. Һүҙ һөйләгәнсе, эш эшләй. Эш яратҡан – уңған, ятратмаған – туңған. Эштән бәхет табыусан.

Ни өсөн был әкиәткә ҡырмыҫҡа образы алынған? Башҡа берәй бөжәк, хайуан түгел?

Ҡырмыҫҡа – бик егәрле йән эйәһе. Берҙәм, татыу йәшәйҙәр, берҙәмлектә уларҙың көсө. Үҙҙәре бәләкәй генә булһалар ҙа тауҙай эш башҡаралар. Уларҙың иләүе бер йәмғиәтте хәтерләтә. Ҡырмыҫҡаларҙың һәр береһенең үҙ холҡо, фиғеле. Һеҙ ҡырмыҫҡа образы аша кешеләрҙе күҙ алдынан үткәрә алаһығыҙмы?

Кешеләр ҙә йәмғиәттә төрлөсә йәшәй. Берәүҙәр артыҡ маҡтансыҡ, эш яратмай, кеше елкәһендә йәшәй. Елкәһе йоҡа, тиҙәр улар тураһында. Ә тағы ла эш һөйөүсән, тырыш, зирәктәре лә осрай. Үҙҙәренең холҡона ҡарап, башҡарған эшенә ҡарап, һәр бер кеше йәмғиәттә билдәле бер урын биләй.

Беренсе ҡырмыҫҡаны хәтерләткән кешеләр йәмғиәттә ниндәй урын биләй?

Ундайҙарҙы беҙ бик яратып еткермәйбеҙ, сөнки улар вәғәҙәләрен үтәмәйҙәр, һүҙҙәрендә тормайҙар. Ялҡауланып, эште ярты юлда ҡалдыралар.

Ә ундайҙар йәмғиәттә нисек ҡулайлашалар?

Вәғәҙә биреп, алдап, кешене үҙҙәренә ҡараталар. Аҙаҡ, асыҡлыҡ ингәс, бындайҙарға иғтибар булмаясаҡ.

Икенсе ҡырмыҫҡа һымаҡ кешеләр тураһында ни әйтерһегеҙ?

Маҡтансыҡты бер кем дә яратмай, ҡоро һүҙ һөйләгән кешегә ихтирам юҡ тиерлек.

Өсөнсөнөң прототибы булғандар йәмғиәттә ниндәй урын биләй?

Лидер булырға тырышалар, хәлдәрен үлсәмәйсә эш итәләр.

Ә дүртенсе ҡырмыҫҡаны хәтерләткән кешеләр һеҙгә оҡшаймы?

Дүртенселәр эштәрен еренә еткереп үтәйҙәр. Хөрмәт ҡаҙаналар.

Башҡарған эшенә ҡарап ихтирам яулайҙар. Ярҙамсылдар. Ауыр минутта шундай кешеләр ярҙамға килә.

Йәмғиәткә кәрәкле булыр өсөн ниндәй сифаттарҙы үҫтерергә кәрәк?

Ниндәй һәләт төрө һәр бер ҡырмыҫҡаға етешмәй? (1.2.3.4.)

III. Яңы информацион алым ҡулланыу («Болот технологияһы»).

«Болот»ҡа алдан әҙәби әҫәр геройҙарының һыҙаттарын сағылдырған 30 һөйләм ҡуйыла.

1. Үлмәҫбай һирәк мыйығын
Ҡапыл тырпайтып ала.
Ҡыҫыҡ күҙен ҡыҫа төшөп,
Хәйләкәр ҡараш һала. (М. Кәрим. «Үлмәҫбай»).

2. Бүтән райондарҙа ла, моғайын, грамоталы кешеләр йәшәйҙер бит. (Т. Ғиниәтуллин. «Мәтрүшкә еҫе»).

3. Айыуҙың ғәҙәт-ҡылыҡтарын яҡшы белә: **сәмсел** йыртҡыс, урманда хужа икәнен белдереп йөрөй.(Н.Мусин. «Йыртҡыс тиреһе»).

4. Дүртенсе улы- Кинйәбайы, атаһы ҡырыҫ, ҡаты ҡуллы булһа ла, нисектер иркәрәк, ялҡауыраҡ булып үҫте.(Н.Мусин. «Йыртҡыс тиреһе»).

5. Ул Хәбибуллаға әле **хәстәрле** әсә, әле һөйкөмлө бисәкәйе булып күҙ алдына килә. (Т.Ғиниәтуллин «Мәтрүшкә еҫе»).

6. Хәбибулла уның алдында **йыуаш** булып ҡала торғайны.(Т. Ғиниәтуллин «Мәтрүшкә еҫе»).

7. Ул мәлдә Хәбибулланың әсәһе ҡырыҫ холоҡло ине. (Т. Ғиниәтуллин «Мәтрүшкә еҫе»).

8. Ой, ниндәй матур бала, ниндәй һөйкөмлө бала! (Т.Ғиниәтуллин. «Әсә һәм бала»).

9. Бик оҡшағас, ярар, күрһәтһен һуң, тип уйланы Сафия, **ихлас** ҡатындың күңеле булыр.(Т.Ғиниәтуллин. «Әсә һәм бала»).

10. Ҡара менән аҡты айыр: бергә ҡушма.
Ике йөҙлө бәндәгә һис йомош ҡушма. (Н.Иҙелбай).

11. Ихласлыҡ – саф күңел аҡлығы,
Ихласлыҡ – дуҫлыҡтың хаҡлығы.(Г.Юнысова).

12. **Әхлаҡлылыҡ** кешелек йәмғиәтенең юғары күтәрелеүенә ярҙам итә. (В.И. Ленин).

13. **Намыҫлы** кеше бер кемдән дә көнләшмәй. (М. Горький).

14. **Мин-минлеккә** таянған бейек тауҙан йығылған. (Мәҡәл).

15. Матурлыҡтан элек **батыр** булыр кәрәк. (Мәҡәл)

16. Дошмандан илең һаҡла, **ярамһаҡтан** серең һаҡла. (Мәҡәл)

17. **Көнсөллөк –** бәхетлеләрҙең дошманы. (Эпитет).

18 **Ялғанлыҡ** һәм **аҫтыртынлыҡ наҙандар** һәм **ҡурҡаҡтар** ышығы. (Ф. Честерфилд).

19. **Тәүәккәллек** ята, тәүәккәллек
Ирмен тигән ирҙең эсендә. (Р. Сафин).

20. **Алдашыу** йәнгә һәм тәнгә бөтмәҫ ғазаптар килтерә. (Ш. Руставелли).

21.Мөхәббәт **яуаплылыҡ** өҫтәй.Унһыҙ тормош юҡ. (И. Гончаров).

22. Дуҫлыҡ – үҙ-ара аңлашыусанлыҡ, тоғролоҡ, **ярҙамсыллыҡ**, ҡараштар берҙәмлеге. (В.И. Ленин).

23. Ир **маҡтана** – ҡорал еңә. (мәҡәл).

24. Гетеныҡ йөҙөнән **яғымлылыҡ** өҙөлмәне. Уны ошолай **ябай, мөләйем** һәм **һөйкөмлө** булыр тип һис кенә лә уйламағайны Ҡаһым. Ул **асыҡ сырайлы,** ҡашы бөгөлөбөрәк тора, күҙҙәре уйсан, **аҡыллы....** (Я.Хамматов. «Төньяҡ амурҙары»).

25. Был саҡта Көтөр торған ауылда бик **мәргән,** ат өҫтөндә оҫта йөрөүсе, ҡурайсы Байғубәк тигән егет була... («Таштуғай риүәйәте»).

26. Әлми бик йүнһеҙ һәм **аҡылға ла еңел** кеше була... («Таштуғай» риүәйәте).

27. Ул үҙе кеше менән **аралашыусан** түгел, йәй булһа бөтә ғүмерен яланда үткәрә, ҡыш булһа инде, кәртәһенән кермәй. Кеше барһа, йомош бирмәй, үҙе лә кешегә йомош һорап сыҡмай.. (Д. Юлтый. «Тимеркәй фәлсәфәһе»).

28. Ә Хәмит һәр ваҡыт **эшлекле** булған. Йорт-ҡаралты тирәһен нығытҡан, иген иккән, балта эше эшләгән. (Ф. Иҫәнғолов. «Хәмит күпере»).

29. Фәғилә менән беҙ бергә хеҙмәт иттек... **Ҡыйыу** санитарка булды ул. Иң ҡаты яуҙарҙа ла ҡурҡып ҡалмай торғайны ул. (Д. Бүләков. «Яралы китап»).

30. Шәкерттәр юлда яҡшы, мәрхәмәтле кешеләргә осрайҙар. (М. Ғафури. «Шағирҙың алтын приискыһында»).

Йәмғиәттә алдынғы ҡарашлы, хәҙерге заман шәхесе булырҙай кешенең һыҙаттарын әҙәби әҫәр геройҙарының яҡшы сифаттары менән тулыландырып, эш эшләйек. Быны өсөн информация «болото» ярҙам итәсәк. Минең арттан мәғлүмәт тултырылған «болотка» инәбеҙ.

Өлгөлө шәхес һыҙаттарына тура килгәндәрен генә һайлап яҙабыҙ.

IV. Был эште төркөмдәрҙә башҡарабыҙ. Кемдер яҙа, икенселәр уҡып, мәғлүмәт һайлай.

Беренсе төркөмдөң идеаль шәхесе ниндәй сифаттарҙы үҙ эсенән алған?

Икенсе төркөм ниндәй шәхесте гармониялы тип тапҡан?

Өсөнсө төркөм ниндәй шәхесте уңышлы, өлгөлө тип баһалаған?

Дүртенселәр, ниндәй һыҙаттарға өҫтөнлөк биргән?

(Балалар һайлаған һыҙаттар экранда сыға).

Мин дә идеаль булырҙай шәхестең һыҙаттарын бергә туплаһым, һөҙөмтәлә эталон булырҙай кеше сифаттары йыйылмаһын ҡыҫтырма итеп эшләнем (закладка для книги). Ошо ҡыҫтырманы уҡыусыларға ла бүләк итәм. (Грамоталы, белемле, уңған, мәрхәмәтле, изге күңелле, аҡыллы...)

V. Һығымта:

Бөгөнгө темаға ҡайтып, кешенең йәмғиәттәге урыны, уға кешеләр тарафынан йүнәлтелгән ҡараш тураһында ниндәй һығымта яһайбыҙ?

Һеҙ үҙегеҙҙе идеаль шәхес тип һанайһығыҙмы? Һеҙгә идеаль шәхес булыр өсөн ниндәй сифаттар етешмәй?

(Күп уҡыусылар белем, аҡыл етмәүен, аҡылдың үҫкән һайын күбәйеүен, уңғанлыҡ етмәүен билдәләнеләр)

Класс сәғәтен ошондай шиғыр юлы менән тамамлана:

Кеше кешеләргә кәрәк булһын,

Бер ҡасан да артыҡ булмаһын. (Р. Ғарипов)

Йәмғиәткә кәрәкле шәхес булып үҫегеҙ, кешеләр һеҙҙе яратһын, һеҙ уларҙан изгелек күрегеҙ, үҙегеҙ ҙә кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә булығыҙ!

«Танграм» башваткысын башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә ҡулланыу

Оҫталыҡ класы

Маҡсат: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына методик яҡтан ярҙам күрһәтеү, тупланған тәжрибә менән уртаҡлашыу, танграмды дәрестәрҙә ҡулланырға өйрәтеү һәм баланы үҫтереү мөмкинлектәре менән таныштырыу.

Әҙерлек: презентация, танграм, балалар өсөн бәләкәй шиғри йыйынтыҡтар, һүрәттәр.

I. Инеш һүҙ.

– Хәйерле көн, ҡәҙерле коллегаларым! Һеҙҙе оҫталыҡ дәресемдә күреүемә бик шатмын! Уңышлы көн барыбыҙға ла! Белгән белгәнен өйрәтә, ти халыҡ мәҡәле. Үҙем белгәндәрҙе һеҙгә еткерә алһам, шат һәм бәхетле булырмын.

Яңыраҡ мин «Танграм» башваҡкысы менән таныштым. Үҙенсәлекле уйын төрө ул. Уйын аша баланы тәрбиәләп булғанын күҙ уңында тотоп, башваҡкысты дәрестә ҡулланып ҡарарға булдым. Һәм был уйын ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс икәнен белдем. Танграмды төрлө йәштәге кешеләр өсөн дә ҡулланып булғанын аңланым.

«Бала уйында туған телдең нескәлегенә өйрәнә, уның музыкаһын һәм филологтар «телдең рухы!» тип атап йөрөткән нәмәне үҙләштерә!» тип яҙған М.Горький. «Танграм» – ҡытай халҡының уйыны, тиҙәр. Тәржемәһе – ағастан ете фигура, йәғни, квадратты ете геометрик фигура сығырлыҡ итеп бүлгәндәр. Ошо фигураларҙан төрлө хайуандар һыны эшләп була. Был ете геометрик фигура квадрат рамка эсенә һалына. Дөрөҫ кенә итеп һалыр өсөн дә башты эшләтер кәрәк. Балалар был уйынды шул хәтлем яраталар, хатта ололар ҙа ҡыҙығып, уйынға тотона, ләкин тиҙ генә рамка эсенә фигураларҙы һала алмай. Бының өсөн оҫталыҡ, иғтибарлылыҡ, зирәклек талап ителә.

Дәрестә фигураларҙы һалып ҡына уйын уйнап ултырыуҙың ниндәй файҙаһы булыр һуң, тип һораусылар ҙа табылыр. Бына шул «Танграм» уйынын мин башҡорт теле дәрестәрендә файҙалы итеп ҡуллана башланым. Ошо тәжрибәмде һеҙҙең менән дә уртаҡлашҡым килде.

Танграм тарихын былай аңлаталар.

Ҡасандыр ике мең ярым йыл элек Ҡытай илендә йәш императорҙың көтөп алған малайы донъяға килә. Йылдар үтә тора, малай матур итеп үҫеп килә. Ләкин был малай ниңәлер бер ҙә уҡырға өйрәнгеһе килмәгән. Көнөн тик уйын уйнап үткәргән. Император үҙ янына донъяның билдәле математика белгесен, оҫта рәссамын, иң аҡыллы фәйләсуфын саҡыртып алған. Уларға шундай шәп уйын уйлап табырға ҡушҡан, ошо уйын аша малайының уҡырға теләге уянһын, тигән. Уйын малайға математика серҙәрен төшөндөрһөн, бала, рәссам кеүек тирә-яҡ мөхитте күҙәтеп, тормош матурлығын аңлаһын, тәбиғәтте ратһын, фәйләсуф кеүек, ябай ғына әйберҙәр артында оло ысынбарлыҡ торғанын аңлап, тормошта быны ҡуллана алһын, тигән. Был өс аҡыл эйәһе танграмды уйлап сығарған. Ши-

чау-тю тип атағандар уйындың исемен. Икенсе төрлө танграм уйыны тип атала. Император ҡәнәғәт буған. Малай был уйын аша уҡырға өйрәнгән, аҙаҡ шәп белгес булып киткән.

Аҙаҡ был уйын Америкаға барып эләгә, уны моряктар алып бара. Американан Европаға сығарыла. Ҡытайса танграм: *тан* – «ҡытайса», *грам* «хәреф» тигәнде аңлата икән. Ҡытайса хәреф. Танграм балаларҙы ғына түгел, хатта ололарҙы ла ылыҡтырған. Мәҫәлән, билдәле математик һәм яҙыусы Льюис Кэролдың 323 мәсьәләнән торған ҡытай китабы булған. Наполеондың да танграмы һәм мәсьәләләр китабы булған. Танграмдың төп ҡағиҙәһе – бөтә ете фигура ла уйында һалынырға тейеш, бер-береһенең өҫтөнә һалып уйналмай. Артабан һинең фантазияңдан ғына тора уйын.



Ошондай төрлө фигураларҙы танграм менән төҙөргә өйрәтеү ҙә баланы төрлө яҡлап үҫтерә. Танграм уйынын интернет магазиндарынан

яҙҙырып йәки үҙең дә эшләп алырға мөмкин. Мин үҙем был уйынды «Бөтә нәмә 39 һум!» исемле магазинда осратып, һәр уҡыусыма етерлек итеп һатып алдым. Төҫлө ҡатырғанан да тиҙ генә ҡырҡып алырға мөмкин.

Мин дәрестә, мәҫәлән, «Танграм» уйынын балаларға таратып бирәм. Улар үҙҙәре теләгән һынды геометрик фигуралар ярҙамында һалырға өйрәнәләр. Шунан был хайуан тураһында белгәндәрен һөйләйҙәр. Башҡалар иғтибар менән тыңлай. Һорауҙар бирергә мөмкин. Шулай итеп, уларҙың телмәр үҫешенә йоғонто яһай танграм. Шунан ошо хайуан тураһында шиғыр юлдарын иҫкә төшөрәләр, мәҡәлдәр, тиҙәйткестәр, һанашмаҡтар, һынамыштар, йомаҡтар әйтәләр. Халыҡ ижадының бөтә төр жанрҙарын иҫкә төшөрәбеҙ ҙә ҡуябыҙ!

Мәҫәлән, ҡуян һынын фигуралар ярҙамында һалдыҡ икән, ти.

Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,
ҡолағы ергә тейгән.

Йәки:

Ҡолағым оҙон,
Ҡылыйҙыр күҙем.
Әммә белегеҙ:
Ҡыйыумын үҙем!

Йылғыр тәпәйем
Иҫән-һау саҡта,
Төлкө лә мине
Тота алмаҫ хатта!

Йәки:

Танышайыҡ – мин ҡуян.
Урман эсендә оям.
Бары тик оямда ғына
Үҙемде батыр тоям. (Г. Юнысова.)

Ошо шиғыр юлдары барыбыҙҙың да иҫенә төшәләр. Балалар шиғыр юлдарын ҡабатлай-ҡабатлай ятлап алалар. Хәтер үҫтереүгә нисек шәп был шиғырҙар һәм «Танграм» уйыны. Ҡуян ҡатнашҡан халыҡ әкиәттәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, балалар, тиеүгә улар «Етем төлкө», «Әтәс менән Ҡуян», «Йомро икмәк!», «Ҡуян тиреһен ябынған төлкө!», «Арыҫлан менән

Ҡуян!» әкиәттәрен әйтәләр. Мәҡәлдәр иҫкә төшөрәбеҙ: *йүнһеҙ һунарсы арба менән ҡуян тотҡан, бер йылға ҡуян тиреһе лә сыҙаған, ҡуян алмаҫ, артынан ҡалмаҫ, ҡуян тотҡоң килһә, бурҙай ал, этһеҙ ҡуян тотолмай* һ. б.

Ҡуян йөрәк тигән нығынған һүҙбәйләнешен дә әйтеүселәр табылыр.

Артабан йомаҡ ҡойошабыҙ:

Йәйгә сыҡһа һөйөнә,
Һоро тунын кейенә,
Ҡышын ҡарҙа күренмәй ул –
Кейенә аҡ кейемгә /ҡуян/.
(Ғ.Ғайсин).

Йәйен – һоро, ҡышын – аҡ,
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ /ҡуян/.

Зирәклекте, иғтибарлылыҡты, эрудицияны үҫтереүгә йәтеш танграм уйыны.



Айыу һынын һалғанда был һүҙ менән фразеологизмдар ҙа иҫебеҙгә төшә:айыуҙан ҡасҡан бүрегә, айыу майы һөртөү, ҡолағына айыу баҫҡан.

Йомаҡтар:

Йәйен - урманда батша,
Ҡышын ҡарҙан да аҫта. /айыу/
Йөрөмәй ул буранда,
Ҡышын йоҡлай урманда,
Йәйен солоҡ «таҙарта»,
Еләкте лә ярата. /айыу/
(Ғүмәр Ғайсин)

«Танграм» уйынын ҡайһы ваҡытты ҡулланып була һуң?

- Төҫтәрҙе ҡабатлағанда;
- Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе иҫкә төшөргәндә;
- Шиғыр ятлағанда;
- Мәҡәлдәр менән танышҡанда;

- Һынамыштар, һанашмаҡтар үткәндә;
- Геометрик фигураларҙы ҡабатлағанда;
- Тиҙәйткестәр үткәндә.

Логик фекерләүҙе үҫтерә, хәтерҙе нығыта, иғтибарҙы талап итә.

II. Практик эш:

Хөрмәтле коллегаларым, хәҙер һеҙҙең менән «Танграм» уйынын уйнап алайыҡ.

Һеҙгә танграм ярҙамында ошондай һындар һалырға тәҡдим итәм.

- Балыҡ
- Әтәс
- Дөйә
- Йылан
- Ҡуян
- Һайыҫҡан
- Ҡарға

Ә хәҙер был һүрәттәргә ҡарата халыҡ ижадын, үткән темаларҙы иҫкә төшөрәбеҙ:

- 4 юллыҡ шиғыр;
- нығынған һүҙбәйләнештәр;
- мәҡәлдәр;
- әйтемдәр;
- һынамыштар;
- һанашмаҡтар;
- тиҙәйткестәр;
- йомаҡтар;
- әкиәттәр һәм башҡалар.

Төймә лә бүләк, дөйә лә бүләк.

Ҡойроғо ураҡ, башы тараҡ (әтәс).

Һайыҫҡан, һайыҫҡан, күкәй эскән, май эскән (үсекләшкәндә әйтелә).

Ҡара ҡарға ҡарҙан бара, ҡанаттарын ҡаға-ҡаға.

Йәне теләгән йылан ите ашаған.

Яҡшылыҡ эшлә лә һыуға һал, халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер.

III. Рефлексия. Кем ниндәй фекерҙә? «Танграм» уйыны оҡшанымы?

IV. Йомғаҡлау.

«Уйынһыҙ тулы ҡиммәтле үҫеш юҡ һәм була ла алмаясаҡ. Уйын – ул ғәйәт ҙур яҡты тәҙрә, унын аша баланың рухи донъяһына аң-белемдең, төшөнсәләрҙең йәнләндереүсе ағымы ҡойола. Уйын – ул белергә тырышыусанлыҡ һәм ҡыҙыҡһыныусанлыҡ усағын ҡабыҙыусы осҡон»,- ти бөйөк педагог В.А. Сухомлинский. Баланың кем икәнен белгең килһә, уйынына ҡара тигәндәр. Халҡыбыҙ борон-борондан киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. Көндәлек тормошта ла сабыйҙарҙың донъяны танып белеүендә, физик һәм рухи яҡтан үҫешендә, дуҫлыҡ, берҙәмлек хистәре тәрбиәләнеүендә, һәләттәрен асыуҙа, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәтеүҙә уйындар ярҙамға килгән. Уйын аша яҡшы һөҙөмтәләргә ирешәбеҙ, улар уҡыу процесына ыңғай йоғонто яһай. Башҡорт теле дәрестәрендә уйындарҙы ҡулланыу түбәндәге маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙы күҙ уңында тота:

1. Уҡыусыларҙың аң-белем даирәһен киңәйтеү, белем, оҫталыҡ, күнекмәләрҙе практикала ҡулланыу;
2. Дөйөм уҡыу оҫталығы һәм күнекмәләрен үҫтереү;
3. Хеҙмәт күнекмәләрен арттырыу.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына дәрестәрҙә ҡулланыу өсөн интернет ресурстар

Маҡсат: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына интернет ресурстар ҡулланырға өйрәтеү, сайттар тураһында мәғлүмәт биреү, телгә һөйөү тәрбиәләү.

Заман менән бергә атларға кәрәк беҙгә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына. Хәҙерге заманда ҡулға китап тотоп ҡына уҡытып булмай йәш быуынды. Сөнки хәҙерге балалар күпте беләләр, яңылыҡтарға ынтылып йәшәйҙәр. Әле интернет селтәрен бөтә коллегаларым да ҡуллана. Ниндәй предметтан дәрес биреүенә ҡарамаҫтан, төрлө этаптарҙа – дәрескә әҙерләнгәндә, дәрес барышында,уҡыусыларға өйгә эш биргәндә интернет ресурстарына таянып эш итәбеҙ. Өй эшен биргән саҡта уҡыусыларыбыҙға төрлө сайттарға һылтанмалар бирәбеҙ. Ошо интернет ресурстарын кем нисек файҙалы итеп ҡулланалыр, мин үҙем дә был йәһәттән тәжрибә туплағанмын. Уҡыусылар өсөн хатта башҡорт телен өйрәнгәндә файҙалы булған сайттарҙың һылтанмаларын бер ергә туплап, буклет формаһында әҙерләп тә бирҙем. 2019 йылдың 6-9 ноябрендә Өфөнөң ВДНХ бинаһында белем биреү буйынса Мәскәү салоны үткәрелде. Мин бында оҫталыҡ дәресен ошо темаға үткәргәйнем.

Ошо файҙалы сайттарҙы һеҙгә лә тәҡдим итәм:

1. http://www.bashkortostan.ru (Башҡортостан республикаһының рәсми мәғлүмәт порталы). Башҡортостандың тәбиғәте, Өфөбеҙ тураһында мәғлүмәттәр кәрәк булғанда ошо сайтҡа рәхим итегеҙ. Яңылыҡтар ҙа була бында.
2. http://www.bashinform.ru/bash (яңылыҡтар). Шулай уҡ ошо һылтанма менән иҡтисад, сәйәсәт, спорт, мәҙәниәт яңылыҡтарын ҡарарға мөмкин.
3. http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage (национальная электронная библиотека РБ). З. Вәлиди исемендәге китапханала булған материалдарҙы, китаптарҙы дәрестә ҡулланабыҙ тиһәгеҙ, был һылтанма ярҙамға киләсәк.
4. http://www.kitap-ufa.ru. З. Биишева исемендәге китап нәшриәтенең сайты.
5. http:tv-rb.ru/ «Тамыр» балалар студияһының тапшырыуҙарын, проекттарын табыр өсөн һылтанма.
6. http://bashenc.ru/ (башкирская энциклопедия). Электрон варианттағы китаптарҙы, төрлө һүҙлектәрҙе,энциклопедияларҙы ошо бай сайттан алырға була.
7. http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage (аудиоколлекциялар, видеоматериалдар, мәҙәниәт, тарих, китаптар һ.б.)

Яңы материалдар менән тулыландырып барыла. Ресурсҡа заявка ҡалдырып, кәрәкле китаптың, журналдың, аудио- видеоматериалдың күсермәһен алырға мөмкин.

8. http://huzlek.bashgort.com/ – Русско-башкирский онлайн словарь. Был һылтанма һүҙҙәрҙең тәржемәһен табырға ярҙам итә.

9. Электрон ҡулланмалар:

http://башкирская-энциклопедия.рф/ Башҡорт энциклопедияһы

http://blang.ru/dicts.php ТУҒАН ТЕЛ (Һүҙлектәр)

http://www.czudovo.ru/ Многоязычный словарь

http://ru.wiktionary.org/ Викисловарь

http://ru.wiktionary.org/ Башҡорт википедияһы

file://башкирско-русский+словарь/ Краткий башкирско-русский словарь

http://dic.academic.ru/ Академикта һүҙлектәр һәм энциклопедиялар

http://mir.zavantag.com/ Мифологический словарь башкирского языка

http://dic.academic.ru/ Башкирский сайт

http://ru.forvo.com/ Forvo Словарь произношений

http://incubator.wikimedia.org/wiki/Wq/ba/ Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре.

10. http://f13.ucoz.net/ Был сайт та файҙалы булыр. Рус һәм башҡорт телдәрендә тематик һүҙлектәр бар, мәҫәлән, «Башҡортостан йылғалары, ҡалалары», «Ҡоштар», «Ағастар» һ.б.

Яҙыусылар, шағирҙарҙың тормош юлы ҡыҫҡаса бирелә, әҫәрҙәрен, шиғырҙарын табып була. «Бәйләнештә» социаль селтәрендә төркөмдәре лә бар. Уҡыусыларға өйгә бирелгән иншаны яҙырға ла ярҙамлаша был сайт. Баланың телгә ҡарата мөнәсәбәтен ыңғайлатып була.

11. http://www.hobobo.ru/catalog/narodnye_skazki_byliny_skazaniya – был сайтта төрлө халыҡтың әкиәттәре йәшәй. Һәр бер халыҡ тураһында мәғлүмәт бирелә, шунан әкиәттәр тәҡдим ителә.Ҡыҙыҡһындырыу йәһәтенән ҡайһы бер әкиәттәрҙең өҙөктәре бирелгән. Мәктәп программаһына ингән әкиәттәрҙең күбеһе был сайтта бар. Мәҫәлән, «Әбйәлил», «Әминбәк», «Алып-батыр», «Һаран бай менән Зиннәт ағай», «Эт үҙенә нисек хужа тапты?», «Кем көслө?», «Ялҡау ҡыҙ», «Етем төлкө», «Юлдыбай һунарсы», «Үгәй ҡыҙ Гөлбикә», «Һарыбай», «Ҡурай» һәм башҡа әкиәттәр.

12. vkmp3.org - был сайтта бейеү көйҙәрен, алфавит буйынса йырҙың исемен яҙып йырҙарҙы (төрлө телдә) табырға була.

13. «Вконтакте» («Бәйләнештә») сайтындағы төркөмдәр: «Яңы башҡорт», «Башҡорт исемдәре», «Люблю башкирский. Вячеслав Чернев» , «Мин башҡорт», «Башҡорт туйы», «Башҡорт мәҡәлдәре» , «Башкортостан и башкиркий язык», «Башкирский язык», «Курсы башкирского языка», «Башҡортостандың үткәне һәм киләсәге тураһында», «Музыка, һүнмә!», «Башҡортса аудиокитаптар», «Башҡортостан тарихы», «Кескәй башҡорт», «Башҡорт балаһы мин», «Башҡорт исемдәре».

14. Үҙемдең эшемдә актив ҡулланған тағы бер сайт «Башкирский язык за 25 уроков» тип атала. Был сайтта дәрескә кәрәк күп нәмәне табырға була. Яңы башҡорт телен өйрәнә башлағандар өсөн бигерәк тә файҙалы. Һүҙлектәр башҡортса-русса, русса-башҡортса, башҡа сайттағы һүҙлектәрҙән ныҡ айырыла. Бында башҡорт хәрефтәре клавиатураһы бар, башҡа хәрефтәр телефондыҡы йәки смартфондыҡы. Һүҙлек тәржемә генә биреп ҡалмай, ә һүҙҙең фразеологизмда ҡулланышын да, күсмә мәғәнәһен дә бирә.

һөйләмдәр ҙә төҙөргә ярҙам итә. Балалар дәрестә ихлас ҡуллана, ата-әсәйҙәргә лә был һылтанманы биргәнмен. Ошо уҡ сайтта ике телдә ҡотлауҙар бар, байрамдарға шиғырҙар, исем аңлатмаһын, төрлө көйҙәр, клиптар, әртистәрҙең биографияһын табып була. Башҡорт теленең грамматикаһы ла бар. Ныҡ файҙалы сайт Фирҙәүес Ғилмитдиновна Хисаметдинова етәкселегендә эшләнгән.

15. Балалар өсөн сыҡҡан бөтә матбуғат баҫмаларының сайттары («Аманат», «Аҡбуҙат» һ.б.) ҡулланып уҡытһаҡ, уҡыусыларыбыҙ мәғлүмәтле лә, белемле лә булыр. Предметты өйрәнеүгә ыңғай мотивация тыуыр.Тағы ла мәктәп уҡытыусылары өсөн кәрәкле тип тапҡан интернет ресурстар һылтанмаһын биргем килә. Уны баҫтырып, таҡта тирәһенә ҡуйһаҡ, балалар ҙа ҡулланыр.

Уҡыу-уҡытыу өсөн мәктәптә ҡулланылған электрон һәм интернет ресурстар

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте:

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте https://region.bspu/ Онлайн башкирский язык, БДПУ.

https://www.bashkortostan.ru/(Информационный портал Республики Башкортостан)

http: //misrbash.moy.su (Сит ил башҡорттары)

http: tv-rb.ru/ (Тамыр проекттары, телевизион тапшырыуҙар

http: huzlck.bashqort.com/ (русса-башҡортса онлайн һүҙлек)

http: www.kitap-ufa.ru (З.Биишева исемендәге китап нәшриәте)

http: f13.ucoz.net (Башҡорт сайты)

http: ebook.bashnl.ru (Культурный мир Башкортостана)

http: ebook.bashnl.ru (Национальная электронная библиотека РБ)

http: www.bashinform.ru (Башҡортостан яңылыҡтары)

http: www.bashenc.ru (Башкирская энциклопедия)

http: www.leph.bashedu.ru/publications/samouchitel.pdf (Самоучитель башкирского языка)

www.hobobo.ru/catalog (Башҡорт әкиәттәре)

http:allmuz.org/melody (бейеү көйҙәре , йырҙары)

Электрон уҡыу ҡулланмалары

Башкирская литература для 7 класса. Учебное пособие. Юлмухаметов М.Б. и др.

Башкирская литература для 8 класса. Учебное пособие. Юлмухаметов М.Б. и др.

Башкирская литература для 9 класса. Учебное пособие. Кунафин Г.С., Идельбаев М.Х.

Башкирская литература для 9 класса. Учебное пособие. Юлмухаметов М.Б. и др.

Башкирский язык для 5 класса. Учебное пособие. Хажин В.И. и др.

Башкирский язык для 5 класса. Учебное пособие. Псянчин В.Ш. и др.

Башкирский язык для 8 класса. Учебное пособие. Габитова З.М., Усманова М.Г.

Башкирский язык для 9 класса. Учебное пособие. Габитова З.М., Усманова М.Г.

Башкирский язык и литература для 6 класса. Учебное пособие. Хажин В.И. и др.

Башкирский язык и литература для 7 класса. Учебное пособие. Хажин В.И. и др.

Башкирский язык и литература для 8 класса. Учебное пособие. Хажин В.И. и др.

Башкирский язык и литература для 9 класса. Учебное пособие. Хажин В.И. и др.

Электрон баҫмалар һәм дискылар

№	Электронные издания и диски учебного назначения	Издательство
	10-11синыф. Башҡорт теле. Интерактив электрон дәреслек. Габитова З.М., Усманова М.Г.	Министерство образования республики Башкортостан
	9 -11синыфтар өсөн. Башҡорт теле. компьютер дәреслеге.Габитова З.М., Усманова М.Г.	Министерство образования республики Башкортостан
	5-се класс. Башҡорт теле. Интерактив электрон дәреслек.Габитова З.М., Усманова М.Г.	Министерство образования республики Башкортостан
	6 класс. Башҡорт теле. Электрон дәреслек. Габитова З.М., Усманова М.Г.	Министерство образования республики Башкортостан
	9 синыф. Башҡорт теле. Интерактив электрон дәреслек. Габитова З.М., Усманова М.Г.	Министерство образования республики Башкортостан
	7 класс. Башҡорт теле. Электрон дәреслек. Габитова З.М., Усманова М.Г.	Министерство образования республики Башкортостан

II.Практик өлөш:

– Хөрмәтле коллегалар, мин хәҙер һеҙгә «Башкирский язык за 25 уроков» сайтына инеп, бер нисә эш төрө башҡарырға тәҡдим итәм.

Мәҫәлән, *ҡуян* һүҙен ошо сайттың һүҙлегенән ҡарайыҡ әле.

(Төрлө һүҙҙәрҙең мәғәнәһен эҙләйбеҙ, исемдәрҙең мәғәнәләрен ҡарайбыҙ, артистарҙың биографияһына туҡталабыҙ, башҡортса клиптар ҡарайбыҙ)

III. Йомғаҡлау.

– Интернет селтәрендә дәрес һәм дәрестән тыш саралар өсөн материалдар бик күп, уларҙы ҡулланып эшләргә генә кәрәк. Заман менән бергә атлайыҡ, коллегалар!


Проект «Взлетай!»
Модуль
«Интерактивныйбашкирский»
Башкирский с нуля для начинающих в контакте.
https://vk.com/bashtele
Самоучитель башкирского.
http://lcph.bashedu.ru/publications/samouchitel.pdf
Социальная сеть работников образования.
https://nsportal.ru/user/881386/page/bashkort-telen-oyrnm
Учим башкирский язык.
http://uchim-bashkir.blogspot.com/2014/12/blog-post_69.html
Перевод русско- башкирский https://ru.glosbe.com/ba/ru/ .
Башкирские народные пословицы и поговорки
https://incubator.wikimedia.org/wiki/Wq/ba/
Телепроект БСТ-Я учу башкирский язык:
http://tv-rb.ru/teleproekty/poznavatelno-razvlekatelnye/ya-uchu-bashkirskiy-yazyk/
10советов как изучать башкирский язык.
http://www.bashinform.ru/news/1052709-kak-vyuchit-bashkirskiy-yazyk/0
Международная система дистанционного обучения башкирскому языку
https://region.bspu.ru/login/signup.php
Башкирский язык за 25 уроков. Хисамитдинова Ф.Х.
https://bashklip.ru/25_urokov_bashkirskogo_yazika
Башкирский язык-башкирский переводчик.
https://vk.com/club91157456
Электронные учебные пособия.
http://kitap-ufa.ru/information/elektronnye-uchebnye-posobiya.php
Предачи на башкирском языке. Детская студия "Тамыр"
http://tamirtv.ru/peredachi/akiyat-kitaby/ – "Әкиәт китабы"
http://tamirtv.ru/peredachi/baitus/ –"Байтус" http://tamirtv.ru/peredachi/baursak/ - "Бауырһаҡ«
http://tamirtv.ru/peredachi/jyrly-karyaz/ - "Йырлы кәрәҙ"
http://tamirtv.ru/peredachi/gora-novostej/ - "Тау-тау хәбәр"
Радио «Юлдаш» http://yuldashfm.ru/my/online/index.htm


Проект «Взлетай!»
Модуль
«Интерактивныйбашкирский»
Башкирский с нуля для начинающих в контакте.
https://vk.com/bashtele
Самоучитель башкирского.
http://lcph.bashedu.ru/publications/samouchitel.pdf
Социальная сеть работников образования.
https://nsportal.ru/user/881386/page/bashkort-telen-oyrnm
Учим башкирский язык.
http://uchim-bashkir.blogspot.com/2014/12/blog-post_69.html
Перевод русско- башкирский https://ru.glosbe.com/ba/ru/ .
Башкирские народные пословицы и поговорки
https://incubator.wikimedia.org/wiki/Wq/ba/
Телепроект БСТ-Я учу башкирский язык:
http://tv-rb.ru/teleproekty/poznavatelno-razvlekatelnye/ya-uchu-bashkirskiy-yazyk/
10советов как изучать башкирский язык.
http://www.bashinform.ru/news/1052709-kak-vyuchit-bashkirskiy-yazyk/0
Международная система дистанционного обучения башкирскому языку https://region.bspu.ru/login/signup.php
Башкирский язык за 25 уроков. Хисамитдинова Ф.Х.
https://bashklip.ru/25_urokov_bashkirskogo_yazika
Башкирский язык-башкирский переводчик.
https://vk.com/club91157456
Электронные учебные пособия.
http://kitap-ufa.ru/information/elektronnye-uchebnye-posobiya.php
Предачи на башкирском языке. Детская студия "Тамыр"
http://tamirtv.ru/peredachi/akiyat-kitaby/ – "Әкиәт китабы"
http://tamirtv.ru/peredachi/baitus/ –"Байтус" http://tamirtv.ru/peredachi/baursak/ - "Бауырһаҡ«
http://tamirtv.ru/peredachi/jyrly-karyaz/ - "Йырлы кәрәҙ"
http://tamirtv.ru/peredachi/gora-novostej/ - "Тау-тау хәбәр"
Радио «Юлдаш» http://yuldashfm.ru/my/online/index.htm

Проект «Взлетай!»
Модуль «Интерактивныйбашкирский»

Ссылка для подписки на детские республиканские печатные издания http://rbsmi.ru/catalog/podpiska/1055 / http://rbsmi.ru/catalog/podpiska/994/

Детская газета «Йәншишмә» https://vk.com/id189168995

Детский республиканский журнал «Аманат» http://rbsmi.ru/catalog/podpiska/994/

Чаты для общения www.istbash.info
YAKTASH.yeshlek.ru

Форумы

Первый независимый Башкирский форум
www.bashkort.com
bashkort.com.ru

Порталдар (чат, блог, форум, галерея):
bashkironline.org
yaratam.info www.yeshlek.ru

Башкирские песни www.mp3.yeshlek.ru www.sarmanai.narod.ru www.bashklip.ru www.bashgort.com www.muz.bash-shop.ru

Башкирская литература www.yeshlek.ru/kitap/ www.husainov.com www.akmulla.ru www.bashskazki.ru Фотоальбомы www.foti.yeshlek.ru www.foto.korotlay.ru

Башкирские шрифты, программы www.yeshlek.ru bg140ucoz.ru rbli.usoz.ru fanurka.narod.ru
andrew.ak-bars.ru www.mfrt.bashkortostan.ru www.macintosh.ufanet.ru baimak.ucoz.ru

Башкирские сайты www.yeshlek-gazeta.ru www.bashqort.com

Исторические сайты ufa1500.com shejere.narod.ru suraman.narod.ru

Словари tugantel.ru tel.bashqort.com dicto.org.ru

Игликова А.И. – учитель башкирского языка и литературы
Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение «Башкирская гимназия № 158 имени Мустая Карима» городского округа город Уфа Республики Башкортостан

Проект «Взлетай!»
Модуль «Интерактивныйбашкирский»
Ссылка для подписки на детские республиканские печатные издания http://rbsmi.ru/catalog/podpiska/1055 / http://rbsmi.ru/catalog/podpiska/994/
Детская газета «Йәншишмә» https://vk.com/id189168995
Детский республиканский журнал «Аманат» http://rbsmi.ru/catalog/podpiska/994/
Чаты для общения www.istbash.info
YAKTASH.yeshlek.ru
Форумы
Первый независимый Башкирский форум
www.bashkort.com
bashkort.com.ru
Порталдар (чат, блог, форум, галерея):
bashkironline.org
yaratam.info www.yeshlek.ru
Башкирские песни www.mp3.yeshlek.ru www.sarmanai.narod.ru www.bashklip.ru www.bashgort.com www.muz.bash-shop.ru
Башкирская литература www.yeshlek.ru/kitap/ www.husainov.com www.akmulla.ru www.bashskazki.ru Фотоальбомы www.foti.yeshlek.ru www.foto.korotlay.ru
Башкирские шрифты, программы www.yeshlek.ru bg140ucoz.ru rbli.usoz.ru fanurka.narod.ru
andrew.ak-bars.ru www.mfrt.bashkortostan.ru www.macintosh.ufanet.ru baimak.ucoz.ru
Башкирские сайты www.yeshlek-gazeta.ru www.bashqort.com
Исторические сайты ufa1500.com shejere.narod.ru suraman.narod.ru
Словари tugantel.ru tel.bashqort.com dicto.org.ru
Игликова А.И. – учитель башкирского языка и литературы
Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение «Башкирская гимназия № 158 имени Мустая Карима» городского округа город Уфа Республики Башкортостан

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә QR штрих-код – кодлаштырылған мәғлүмәтте ҡулланыу

Оҫталыҡ класы

Маҡсат:

– башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә QR штрих-код – кодлаштырылған мәғлүмәтте ҡулланыу юлдарын өйрәтеү;

– белем биреүҙә QR-код ҡулланыу буйынса тәжрибә уртаҡлашыу.

Йыһазландырыу: ноутбук, экран, проектор, презентация, QR-код төшөрөлгән эштәр карточкалары, телефондар, төркөмдәр өсөн эштәр, уҡытыусыларға анкета, төҫлө жетондар.

– Хәйерле иртә, хөрмәтле коллегалар**!** Оҫталыҡ класында һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Һеҙ бөгөнгө дәрестән ҡәнәғәт ҡалырһығыҙ тип уйлайым. Экранға ҡарағыҙ әле. Бында нимә күрәһегеҙ?

(К. Малевичтың «Ҡара квадрат»картинаһы экранға сығарыла).

– Эйе, был билдәле рәссам Казимир Малевичтың «Ҡара квадрат» картинаһы.

– Был картина тураһында кем нимә белә?

– Был картинаға 100 йыл, шулай булыуға ҡарамаҫтан күп кешеләр картинаға хайран, ул картинанан ниндәйҙер серлелек һаман табырға тырышалар, тормош мәғәнәһен эҙләүселәр ҙә булыуы аптырата. Картина 1915 йылда төшөрөлгән. Хаҡы – 140 миллион һум. Размеры – 79.9х79.9 см.

– Ә бына был слайдта нимә күрәһегеҙ? (оҫталыҡ дәресендә ҡатнашыусыларҙың яуаптарын тыңлау. QR-код һүрәте экранға сығарыла.

– QR – кодтарҙы ҡайҙа күрергә була?

– Дөрөҫ, был картина түгел, ә QR-код. Хәҙерге заман аҡлы-ҡаралы квадраттары донъябыҙға үтеп инде, күп ерҙәрҙә әүҙем ҡулланабыҙ. Күп яҡлап беҙҙе ҡыҙыҡһындыра улар.

Мин бөгөн ошо аҡлы-ҡаралы квадраттарҙы, йәғни QR-кодтарҙы белем биреүҙә нисек ҡулланып булыуы тураһында тәжрибәм менән уртаҡлашмаҡсымын.

QR-код (инглизсә. quick response – быстрый отклик, тиҙ яуап биреү) тигәнде аңлата.

– матричный код (двумерный штрих-код) тип атайбыҙ. Икенсе төрлө беҙ уны мәғлүмәтте миниатюрлап күрһәтеү тип тә әйтә алабыҙ. Ул Япония компанияһы «Denso-Wave» (денсо уэйв) менән бәйле. 1994 йылда уйлап сығарғандар. QR-код ҙур мәғлүмәтте бәләкәй генә урын биләгән майҙанда урынлаштырып һыйҙырыу икенсе төрлө әйткәндә.

QR-кодҡа иң күбендә 7089 цифр һыйҙырып була.

Әгәр һандар менән хәрефтәр бергә булһа (латинса), 4296 билдә һыя.

Тик хәрефтән генә торған (һүҙҙәр) мәғлүмәткә 2953 хәреф коды һыйҙырышлы (кириллицала). Windows та – 1251, иероглифта 1817 билдә һыя.

QR-код тиҙ генә эшләнә, ябай ғына. Уны белем биреүҙә төрлөсә ҡулланып була.

QR-код- квадраттағы код, билдә. Квадрат эсенә аҡлы-ҡаралы бәләкәй квадраттар ултыртыла. Әйтеүемсә, эсенә бик күп мәғлүмәт һыя, шул яғы менән ул бик ҡулайлы. Тиҙ уҡыла, быныһы лә бик шәп. Гаджетың ғына булһын!

Тәүҙә QR-код эшләй торған сервистар менән таныштырып үтәйем.

Рус телендәге сервис QR coder

Сервис QR code Generator

Сервис Qrstuff

генератор QR-кода Creambee (цветной)

QR-кодты эшләргә интернет булыуы кәрәк, генератор QR-кодов тип яҙып, яндекс аша инәбеҙ.

II. Практик бүлек.

Һеҙҙең һәр берегеҙҙең алдығыҙҙа ноутбуктар бар. Әйҙәгеҙ, бергәләп эште башлайыҡ.

1) гугл йәки яндекс аша «генератор кюар кода» тип яҙабыҙ.



2) беҙ темаға ярашлы һүҙҙе яҙабыҙ. Мәҫәлән, 7-се класта Ғайса Хөсәйеновтың «Һуңғы тарпан» әҫәрен уҡыйбыҙ. Тарпан тигән һүҙҙе яҙабыҙ. Был һүҙ балаларға таныш булмаҫҡа мөмкин, дәрестең асҡыс һүҙе тип тә ҡарайыҡ.

3) «создать код» тигән төймәгә баҫабыҙ.

4) экрандың уң яғында беҙҙең QR-код сыға. Был кодты һүрәт итеп эш өҫтәлебеҙгә йәки вордка һаҡлап ҡуябыҙ.

1. •Генератор QR кода сайтына инергә, мәҫәлән, http://qrcoder.ru/.(йәки үҙегеҙгә оҡшаған сайтҡа)
2. •"Закодировать текст" тигән төймәгә баҫырға
3. •Код яһарға теләгән тексты табырға (размерын онотмаҫҡа)
4. •Размер һайлағас   код ҡуябыҙ
5. •QR кодтың һүрәтен компьютерға һаҡларға һәм ҡағыҙға сығарып алырға.

– Шулай итеп, кәрәкле мәғлүмәтте кодҡа ултырттыҡ. Ә нисек артабан уны ҡулланырға? Нисек уҡырға?

Был бик ябай эш. Гаджеттарыбыҙ ярҙамға килә. Бына ошо ҡушымталар аша инәбеҙ:



1. • Камералы мобиль телефонды алығыҙ
2. • QR код сканын яһай торған программаны һайларға.
3. • Камераның объективын QR кодҡа тоҫҡағыҙ
4. • Мәғлүмәтте алығыҙ!

Бының өсөн «сканер QR и штрих-кодов» һүҙен баҫып, сканды эҙләп табабыҙ (*телефондар менән эш*)

QR-кодға нимәне йәшереп була һуң?

- мәҡәлдәр
- йомаҡтар
- ҡыҫҡа ғына (8 юллыҡ) шиғыр
- ҡотлауҙар
- иғландар
- ҡағиҙәләр
- биография һәм башҡа мәғлүмәттәр.

Миҫал өсөн З. Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәре:

Һуңғы ваҡытта беҙ ҡулланған мәғлүмәттәр:

1. «Аманат» журналының апрель һанында балаларҙы бүләкләү сараһын QR-кодҡа ултыртҡандар.

2. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында QR-код менән мәғлүмәт бирелә башланы.

3. Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында QR-кодлы башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты бар. Башҡорт телен өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса электрон ресурс үҙәге тип атала ул. Йәғни, кабинет интернет мөмкинлектәрен файҙаланыу аша башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса белем алырға ярҙам итә. Быны өсөн бары кеҫә телефоны йә планшет һәм уларҙағы махсус «Сканер QR-кодов» тигән ҡушымтаның булыуы кәрәк.

Стендтарҙа QR-кодтарға ултыртылған бик күп мәғлүмәттәр һаҡлана. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыларының биографиялары ике телдә кодланған. Әҙиптәрҙең тормош

юлы, ижады менән тәү башлап танышыу өсөн башҡортса википедиянан да уңайлы сығанаҡ юҡ. Бындай мәғлүмәт тап ошо стендтарға беркетелгән дә инде.Телефонды бирелгән QR-кодҡа килтереүебеҙ була, был мәғлүмәт килеп сыға. Оҙон итеп һылтанма йыйып ултырырға ла кәрәкмәй, бик ҡулай шул яғы сыға.

Юғары кластарҙа программаларға романдар ингән. Бер-ике сәғәт эсендә был романдарҙы тулыһынса уҡып өлгөрөп булмай, бының өсөн әҫәрҙе үҙ аллы уҡыу талап ителә. Был әҫәрҙең цифрлаштырылған варианты ла стендта бирелгән.

Тағы ла стендтарҙың береһендә бик уникаль QR-код бирелгән.Ул беҙҙе турана-тура Зәки Вәлиди исемендәге китапхананың электрон сығанаҡтары араһына алып инә һәм кәрәкле әҫәрҙе табып уҡыу мөмкинлеген бирә.

Бына ошо код беҙҙе Милли китапханаға алып инә:

Уҡыусы мәктәп китапханаһына бармайынса ла ошо код аша үҙен ҡыҙыҡһындырған китапты милли китапханабыҙҙан табып уҡый ала. Мәктәптә уҡылған әҫәрҙәр үҙебеҙҙең гимназия китапханаһында бер нисә экземплярҙа ғына булыуын иҫәпкә алғанда был код шулай уҡ

балаларға ярҙамға килә. Тәнәфес ваҡыттарында ла парта артында уҡып ултырған балаларҙы осратабыҙ, улар шулай уҡ кодтарға мәрәжәғәт итеп, кәрәкле китапты таба. Тағы бер стендта башҡорт телен өйрәнеүсе ғалимдарыбыҙ тураһында белешмә, уларҙың ғилми хеҙмәттәре QR-кодтарға ултыртылған.

Башҡорт телен өйрәнгәндә интернет ресурстар ярҙамға килә. Балаға уңай булһын өсөн уларҙың һылтанмалары QR-код аша бирелгән.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады өлгөләренә, балалар әҙәбиәтенә, нәфис әҙәбиәткә шулай уҡ ошолай кодтар ярҙамында инеп була. Төрлө һүҙлектәрҙе, энциклопедияларҙы ла кодтар аша тиҙ табып була.

4. Үҙем тураһында мәғлүмәт «Мультимедийный кабинет» конкурсына тулы күләмдә кәрәк булғас һәм бының өсөн бер генә биткә һыйҙырыу мөмкинлеге булғас, миңә ярҙамға тағы ла шул QR-кодтар килде. Улар аша интернет селтәрендә һалынған видеоны ла ҡарап, презентацияны ла күреп булды.

5. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының Форумына барғанда таратма материал алып барҙым. Унда үҙем уйлап сығарған уйынды уйнаттым, ә уйын тәртибен һәм уйындың мәғлүмәттәрен QR-код ярҙамында күрһәттем.

6. Гимназия музейҙарының барлыҡ экспонаттарына ла QR-кодтар ҡуйҙыҡ. Уның эсенә өс телдә ошо экспонат тураһында мәғлүмәт һалынды. Экскурсияға килгән кешеләрҙе экскурсоводтарһыҙ ҙа таныштырып була кодтар ярҙамында. Бары телефонды кодҡа яҡынайтыу ғына кәрәк.

7. Мәктәп китапханаһында ла ҡаланың башҡа китапханалары тураһында мәғлүмәт QR-кодтарға ултыртылған. Уҡыусы гимназияла таба алмаған китабын ошо кодтар ярҙамында табасаҡ.

8. Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайына алып барған күргәҙмәлә лә QR-кодтар бар.

III. Йомғаҡлау.

QR-кодтарҙы уҡытыуҙа төрлөсә ҡулланып була. Фантазияң ғына етһен! Дәрескә ингәндә лә алдан ишеккә йәки таҡтаға ҡуйылған кодтар аша бала дәрестең темаһын тәнәфестә үк алдан белә ала.Ул үҙенең фекерен тәнәфестә үк туплай башлай. Бәләкәй майҙанға бик ҙур күләмле мәғлүмәтте һыйҙыра алыуы менән QR-кодтар уникаль.

IV. Рефлексия.

Оҫталыҡ дәресендә, коллегалар, һеҙ яңылыҡтар алдығыҙмы? Ҡыҙыҡлы булдымы? Рефлексия эшләп алайыҡ әле, жетондар ярҙамында баһалап китеүегеҙҙе һорар инем. (Алдан бирелгән төҫлө жетондар ярҙамында баһалау).

V. Өйгә эш.

Берәй темаға алдан һеҙ ниндәй QR-кодтар әҙерләр инегеҙ?

QR-кодтар белем биреүҙә нисек итеп кодтарҙы ҡулланып булыр ине икән? Ошо һорауҙарға яуаптар әҙерләргә.